ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 сентябрь (нарысай)

2018

№35 (817)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**_Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле 1 сентябрҙән яңы хаҡтар менән старт ала. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!_**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туған тел мәсьәләһе...**

телдән төшә лә ҡала



5

**Законда каникулдар булмай...**



йәки Ашаған белмәй, тураған белә

8-9

**Хыялланығыҙ...**



Барыһы ла хыялдан башлана

11

**Башҡорт аҫалы балаҫы**



12-13

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниңә башҡорт ауылында йәшәгән башҡорт ғаиләһендә рус телле булып үҫә бала - был хәлде иҫкәртеү алымдары ниндәй?

***Гөлсимә ИШТАНОВА, Өфө районы Шамонино ауылында йәшәүсе өс бала әсәһе:*** Бер нисә йыл элек кенә әле ҡала мөхитендәге балалар башҡортса һөйләшһен өсөн "Өйҙә - тик башҡортса!" ҡағиҙәһе ыңғай һөҙөмтә бирә ине. Бөгөн был ҡағиҙә ауыл ерлегендә үҫкән башҡорт балаларына ла ҡағыла. Төпһәнден төбөндә ятҡан башҡорт ауылдарында ла мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың русса һөйләшеүен күҙәтәбеҙ. "Балалар айына бер көн, ҡәрсәйҙәренең пенсияһы килгән көндө генә башҡортса һөйләшә, уныһы ла ярты көн", тип шаярта ҡайһы берәүҙәр. Сәбәбе - бөгөнгө тормош үҙе, беҙҙе уратып алған мөхит, интернет. Хәйер, тормош, яҙмыш, тип япһарып ҡуйыу иң еңел һылтау. Көнө-төнө планшет-телефон тотторып, йәнһүрәт-маҙар менән әүрәтмәгәндә лә, бала йәһәт кенә икенсе телде үҙләштереп бара. Биш-алты йәшлек балаларыбыҙҙың рус телендә беҙҙән дә яҡшыраҡ аралаша, ә үҫмерҙәребеҙҙең хис-тойғоларын арзанлы сит ил сериалы артистарына эйәреп белдерә башлауы шунан килә лә инде.

Ни эшләргә? Тәгәрмәс уйлап сығармайбыҙ, беҙҙең ғаиләнең дә алымдары күпселектеке кеүек. Минең балаларым әле бәләкәй, үҫмер ҡоронa инмәгән, уларға һүҙем үтә. Шуға, тәү сиратта "Өйҙә - тик башҡортса!" ҡағиҙәһен ҡулланабыҙ. Малайҙарға тик башҡортса өндәшәбеҙ, башҡортса яуап бирәбеҙ. Хатта уйынсыҡтары менән башҡортса һөйләшеп, уйнап күрһәткән саҡтарым була. Мультфильмдағы русса һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып уйнаған балаларға башҡортса уйнау ныҡ оҡшай. Ике йыл буйы баламды балалар баҡсаһының рус төркөмөнә йөрөткән әсәй булараҡ шуны әйтәм: балалар баҡсаһындағы башҡорт төркөмдәренең телде һаҡлау буйынса әһәмиәте ғәйәт ҙур. Шуның өсөн мәктәпкәсә йәштәге учреждениеларҙа башҡорт төркөмдәрен мотлаҡ һаҡлап ҡалырға, булмаған осраҡта уларҙы астырырға кәрәк. Нисек кенә теләһәк тә, ғаиләлә телде өйрәнеү сикләнгән барыбер. Мәктәптә инде башҡорт әҙәби теленең нигеҙҙәре һалына, шуға ла мәктәптә башҡорт телен өйрәнеү мотлаҡ. Интернеттан тулыһынса баш тартып булмай, сөнки мин тыйһам, улар башҡа ерҙә интернет эҙләйәсәк. Шуға ла, донъя селтәренә ингәндә балаларыма башҡорт мультфильмдарын, әкиәттәрен, тәржемәләрҙе күрһәтергә ынтылам.

Ҡайһы саҡта балаларымдың сатай-ботай рус һүҙҙәрен ҡушып һөйләүенә аптырап, матур итеп башҡортса һөйләшә белгән балалар үҫтерә алырмынмы-юҡмы, тип ҡуям. Әммә ундай ҡурҡыуымды төпкәрәк йәшерәм дә, тағы һөйләйем, өлгө итеп килтерәм, аңлатам... Үҫмер саҡтарына еткәнсе туған телде аңдарына һеңдереп ҡалдырырға тырышабыҙ. Телдәре асылыу менән "Мин - башҡорт!" тип әйтергә өйрәтәбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡортса һөйләшә белмәгән балаларҙы ла миҫалға килтерәбеҙ. Бына улар рус телен генә белә, ә һеҙ бер юлы ике телде беләһегеҙ, тип дәртләндерергә тырышабыҙ инде...

(Дауамы 2-се биттә).

КӨНАУАЗ

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА...

## уңыштар, ҡаҙаныштар юлдаш булһын!

**Башҡортостан Хөкүмәтендә белем биреү учреждениеларының яңы уҡыу йылына әҙерлеген тикшерҙеләр. Хәбәр ителеүенсә, дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡыусыларҙың дөйөм һаны 479,8 мең кеше, был 2017 йылға ҡарағанда 12,7 меңгә күберәк. Беренсе класс уҡыусылары иһә 53 мең, уҙған йылға ҡарағанда яҡынса 700 балаға күп. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң 128 муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһына быйыл 117 мең уҡыусы белем алырға киләсәк, уларҙың 14 меңе - беренсе синыф балалары.**

(Дауамы 4-се биттә).



12+

УЙЛЫҒА - УЙ

**Элек-электән беҙҙең халыҡта юғары вазифа башҡарған кемдер берәү хаҡында һүҙ барһа, "Ул урында эшләй", тигән һүҙбәйләнеште ҡулланалар. Ҡайсаҡ бәғзе кешеләрҙең "Фәлән ерҙә фәлән ойошманың хужаһы", тип, үҙенең улын йәиһә ирен, йә булмаһа тағы кемделер маҡтағанын да ишетәһең. Был, әлбиттә, насар түгел. Кеше үҙенең яҡынының ниндәйҙер берәй яҡшы урын биләп тороуына ҡыуанып, башҡаларға ла был турала һөйләргә хаҡлы. Әммә бына шундай юғары вазифалар һәр саҡ кешенең кемлегенең тулы күрһәткесе була аламы икән?**

# УРЫН КЕШЕНЕ БИҘӘЙМЕ?

Булыуы ла бик мөмкин, тип әйтер инем мин. Мәҫәлән, берәй кеше: "Улым дауаханала хирургия бүлеге мөдире булып эшләй", - ти икән, мин шунда уҡ булдыҡлы, тәжрибәле доктор хаҡында һүҙ барыуына төшөнәм, сөнки бындай яуаплы урынға мөдир итеп лайыҡлы булмаған кешене бер ҡасан да ҡуймаясаҡтарын беләм. Унан башҡа ла быға һәр төрлө миҫалдар килтерергә була. Тик кемдер шунда уҡ юғары вазифаның бәғзе кешеләрҙең "башын әйләндереүе" хаҡында минең менән мотлаҡ бәхәс башлаясаҡ. Ошо осраҡта ла мин уның менән килешәсәкмен, сөнки бында ла дөрөҫлөк бар һәм бындай хәлдәр ҙә һәр кемебеҙгә таныш.

Барыбыҙ ҙа бала саҡтан уҡ "Урын кешене биҙәмәй, кеше урынды биҙәй", тигән әйтемде ишетеп үҫтек. Ләкин мәктәп уҡыусыһы, йә иһә студент, йәш һөнәрмән булған дәүерҙәрҙә, ғөмүмән, йәш саҡта был мәҡәлдәге хәҡиҡәт хаҡында әллә ни уйланмайбыҙ. Ысынлап та, барыбыҙ ҙа бер тигеҙерәк дәрәжәләбеҙ, осрашҡан мәлдәребеҙҙә һөйләшергә уртаҡ темалар ҙа табыла һалып тора, хатта бер-беребеҙҙең телефон, адрестарын да алышабыҙ. Ҡабаттан айырылышып киткәс, бер-беребеҙгә күпмелер ваҡыт шылтыратышып та алабыҙ. Был - тәбиғи. Бындай хәлдәр барыбыҙға ла таныш. Ә бына бәғзе яҡын танышың менән оҙаҡ, әйтәйек, егерме йылдар күрешмәй тороп, осрашырға тура килә ҡайсаҡ...

Студент йылдарындағы бер танышымды (ул саҡта хатта бер аҙ дуҫтар ҙа инек) иҫләйем. Ябай ауыл малайы. Ул башҡа урында уҡып йөрөгән булыуға ҡарамаҫтан, милләттәштәр булғас, нисектер танышып киткәйнек. Осрашҡан һайын ҡәҙимге күрешеп, кәрәк-кәрәкмәгән хәбәрҙәр һөйләшеп, студент кафеһына инеп сәй эсеп йөрөнөк. Ул миңә хатта үҙенең курсындағы бер матур ғына башҡорт ҡыҙын да димләп йөрөгәнен хәтерләйем... Шул мәлдәрҙән алып беҙҙең юлдар айырылды. Мин башҡа яҡтарға оҙайлы хәрби хеҙмәткә киттем. Ҡайтҡан арала әлеге танышым хаҡында унда-бында яҡшы хәбәрҙәр ишеткеләп ҡала инем. Хеҙмәт баҫҡысы буйынса уның шәпләп үҫеүе хаҡында белгәс, быға ысын күңелдән шатландым. Әммә ниңәлер, инеп күреп сығырға, эш кешеһен артыҡ "бимазаларға" күңелем тартманы. Шул хәтлем айырылмаҫ уҡ дуҫтар түгел инек бит инде. "Гражданка"ға тыуған яҡҡа ҡайтып йәшәргә ниәтләгәс тә, сираттағы бер ялымда әлеге танышыма инеп, уның менән "ҡабаттан танышып" тигәндәй, бер юлы үҙемде лә күрһәтеп сығырға булдым. Артыҡ "яныП" барған йомошоң булмаһа ла, танышың менән хәл-әхүәл һорашып, үткәндәрҙе бер аҙ иҫкә алыу ҙа күңелле бит.

(Дауамы 6-сы биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ниңә башҡорт ауылында йәшәгән башҡорт ғаиләһендә рус телле булып үҫә бала - был хәлде иҫкәртеү алымдары ниндәй?



(Башы 1-се биттә).

***Светлана СӨЛӘЙМӘНОВА, Өфө районының Нуғай ауылында йәшәүсе өс бала әсәһе:*** Минең ғаиләлә лә шул бер үк проблема туған тел менән. Көн дауамында балаларға "Башҡортса һөйләшәбеҙ!" тип иҫкәртеп, төҙәтеп, тылҡып торорға кәрәк. Әммә иҫкәртеү ҡәтғи, балала туған теленә ҡарата нәфрәт уятырлыҡ булмаһын, тип уйлайым. Иренмәйенсә, матурлап аңлатырға, үҙ туған теленә ғорурлыҡ тойғоһо һалырлыҡ итеп төшөндөрөргә кәрәк.

Ни өсөн ауыл балалары ла урыҫса һөйләшә? Сөнки телевизорҙағы йәнһүрәттәр урыҫса, планшеттағы уйындар һәм башҡа программалар урыҫса. Ә баланы гаджеттарҙан бөтөнләй сикләп ҡуйырға ярамай, ул тиҫтерҙәре менән бер кимәлдә ҡыҙыҡһынып үҫергә тейеш. Сама менән телевизорын да, гаджеттарын да рөхсәт итергә кәрәк. Сәбәптең ошо яғынан ҡарағанда, башҡорт телендәге заманса йәнһүрәттәрҙе, уйындарҙы мөмкин тиклем күберәк ижад итеү шарт. Бала тиҫтерҙәре ҡараған йәнһүрәттәрҙе күрергә теләй, көсләп, икенсе фильмдарҙы, каналдарҙы ҡаратыу шулай уҡ килешкән эш түгел. Урамда үҙ-ара аралашҡанда, уйнағанда иптәштәре һөйләгән йәнһүрәттәрҙе белмәй тороуы балала психологик кәмһенеү, ауырлыҡ тойғоһо уятырға мөмкин.

Һәм тағы бер сәбәп: өләсәй-олатайҙарҙың, атай-әсәйҙәрҙең, бала башҡортса аңламай, тип, урыҫса һөйләшеүе. Аңлатырға иренеү була инде быныһы! Вайымһыҙлыҡ, бошмаҫлыҡ! Элек ейәндәр өләсәйҙәрҙең көйөнә тора ине, хәҙер өләсәйҙәр ейәндәр көйөнә тора. Ейәнем менән һөйләшеп, урыҫсамды шымартам, тигән өләсәйҙәр ҙә бар - бына ҡайҙа наҙанлыҡ һәм бына ниҙән һәләкәт! Ә бит ейәнең һеҙгә урыҫса өндәшкән һайын ныҡышып башҡортса һорау кәрәк, белмәмеш, аңламамыш булып! Минең әсәйем шулай талап итә...

***Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА, Иглин районының Иглин ҡасабаһында йәшәүсе 3 бала әсәһе:*** Әгәр ҙә берәйһе бына шулай, башҡорт ауылында урыҫса һөйләшәләр, тип әйтһә, биллаһи, ышанмаҫ инем. Үҙемә осрашырға тура килде шундай хәл менән. Урыҫса һөйләшкән баланың башҡорт әсәһенән: "Нисек улай?" - тип аптырап һорауыма, "Көнө буйы русса йәнһүрәт ҡарайҙар бит", тип кенә яуап бирҙе. Ә бит бында йәнһүрәттең бөтөнләй ғәйебе юҡ. Беренсенән, ниңәлер күптәр, урыҫ телен һәйбәт белһә, тимәк, балам уңышлы, ҙур кеше буласаҡ, тигән төптө хата фекерҙә. Шул уҡ ауылда баланын урыҫса һөйләшкәнен ишетеп тә бер кем тыймай. Русса ғына еппәрә түгелме, тип көлгән булалар - был хуплау һымаҡ ҡабул ителә. Унын һайын бала ҡотора, мин текә, мин шәп, тип уйлай. Ә балалары башҡортса һөйләшкән атай-әсәй үҙенекен кәм иттергеһе килмәй, уйында балаһының киләсәген күҙаллап, минеке уҡырға инә алмай ҡуйһа, минеке эшкә урынлаша алмай ҡуйһа, тип икеләнә, балаһы менән вата-емерә русса һөйләшә башлай. Барыһы ла ата-әсәнең милли тойғоһо һәм үҙенә баһаһы ни тиклем көслө булыуына бәйле. Шулай уҡ күп күҙәткәнем бар: балаһы килеп, мама, тиһә, әсәһе, әү, ти. Төҙәтмәй! Шул урында матур ғына итеп, балам, миңә әсәй тип әйт, тиһә, ул уны башына ғүмерлеккә һеңдереп ҡуясаҡ бит инде! Икенсенән, баланың оҙайлы сәғәттәр буйы йәнһүрәт ҡарауы шулай уҡ дөрөҫ түгел. Бала менән аралашырға, тиңдәштәре менән уйнатырға, китаптар уҡырға, йоҡлар алдынан әкиәттәр һөйләргә кәрәк. Шул ваҡытта милли, әхлаҡи, иман тойғолары үҙенән-үҙе һалынасаҡ.

...Кисә үҙемдән тағы һоранылар: "Һеҙ балаларығыҙ менән өйҙә башҡортса һөйләшәһегеҙме?" Яуабым шулай булды: "Ә тағы ниндәй телдә һөйләшергә була һуң? Ҡытай телен белмәйем, инглиз теле икмәк-тоҙлоҡ ҡына. Башҡортса! Әлбиттә, башҡортса!" Сираттағы һорау: "Балалар баҡсаһында ҡыйын булманымы?" "Бер ауырлыҡ та булманы! Сафия ҡыҙым урыҫса бөтөнләй белмәй барҙы унда, хәҙер беҙҙән яҡшыраҡ һөйләшә. Ысын! Балалар телде тиҙ отоп ала. Урыҫ телен өйрәнмәй ҡалыр, тип ҡурҡмағыҙ, бына әле бәләкәй саҡтарында башҡортса аралашмаһағыҙ, туған телен өйрәнмәй ҡалыуҙары мөмкин - ана шунан ҡурҡығыҙ! Ә Сафия ҡыҙым ике телде лә белеүе менән ғорурлана. Яңыраҡ ҡына баҡсанан ҡайтты ла: "Унда мин генә ике телдә лә һөйләшә беләм", - тине ғорурланып. Мин үҙ сиратымда уны маҡтап ебәрәм: "Шәп тә инде! Мәктәпкә барғас, инглиз телен өйрәнһәң, һин иң күп тел белеүсе буласаҡһың!"

**Әйткәндәй, гәзит уҡыусыларыбыҙҙан тағы ниндәйерәк фекерҙәр булыр? Әйҙәгеҙ, фекер алышайыҡ был үтә мөһим мәсьәлә буйынса. Хаттар көтәбеҙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, уҙған уҡыу йылы алдынан 161-се лицейға килгәндә, Дим-8, Дим-9, "Сағыу" биҫтәләре халҡы өсөн Дим районында яңы мәктәптәр төҙөү кәрәклеге хаҡында әйткәйне. Әле Дим районындағы "Сағыу" биҫтәһендә мәктәп төҙөлөшө дауам итә. Төҙөлөш июндә башланды. Уҡыу йортоноң майҙаны - 22 мең квадрат метрҙан ашыу. Мәктәп "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 объект" проекты сиктәрендә төҙөлә.

✓Өфөлә "Башҡортостан Республикаһы Кубогы-2018" тамамланды. Йолаға әүерелгән халыҡ-ара миҙгел алды турнирында быйыл шәхси осрашыуҙа еңеү иҫәбенә Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһын уҙып киткән "Салауат Юлаев" хоккейсылары еңеү яуланы. Өсөнсө урында - Түбәнге Каманан "Нефтехимик", ә турнир таблицаһын Астана "Барыҫ"ы йомғаҡланы, тип хәбәр итә клубтың матбуғат хеҙмәте.

✓Уҙған ял көндәрендә Ғафури районының Ҙур Үтәш ауылында сәсән-импровизатор Сәйфулла Төхвәтулла улы Сәғитовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға (1983- 1957) арналған "Сәсән көнө" уҙҙы. Башҡортостандың Милли архивы директоры урынбаҫары Нияз Сәлимов, сәсәндең ҡыҙы - 91 йәшлек Кәшифә Сәйфулла ҡыҙы сығыш яһаны. Сәйфулла сәсән тураһында мәғлүмәттәр "Башҡорт энциклопедияһы"ның бишенсе томына индерелгән.

✓Башстат республикала пенсияларҙың уртаса күләмен атаны. Һуңғы йылда пенсионерҙар һаны 1,5 процентҡа артҡан һәм хәҙер 1,186 миллион кеше тәшкил итә. Былтыр улар 1,168 миллион булған. 995,2 мең пенсионер ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһын ала, июль башына түләүҙең уртаса күләме - 13 099 һум. Инвалидлыҡ буйынса уртаса пенсия - 8537,8 һум, ҡараусыһын юғалтҡан осраҡта - 8996,3, дәүләт пенсия тәьминәте буйынса түләү 9382,7 һум тәшкил итә. Һөҙөмтәлә пенсияның уртаса күләме - 12791,8 һум.

✓Бөрйән районының ете тораҡ пункты өсөн газ үткәргесен инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу буйынса "Газпром"дың берҙәм заказсыһы - "Газпром инвестгазификация" компанияһы төҙөргә күҙаллай, тип хәбәр итә "Интерфакс". Төҙөлөш шул иҫәптән "Башҡортостан" милли паркы һәм "Алтын Солоҡ" ҡурсаулығы биләмәләре буйлап үтә. Газ үткәргесе район үҙәген Мәндәғол, Әтек, Кейекбай, Ғәбделгәрәй, Ҡотан, Ырғыҙлы ауылдары менән тоташтырырға тейеш.

✓ *Юғиһә, күпселек мәктәп коллективтары бөгөн үҙ эшмәкәрлеген фәҡәт туған телдәрҙе уҡытыуға ҡаршы көрәшкә туплап, көн тәртибендәге башҡа мәсьәләләрҙән ситләшә төштө, буғай.*



БЫЛ АЙҘА...

# УҠЫУЫҢЫҘ БЕЛЕМ ЮҠ,

## белемһеҙ көнөң юҡ



**Һарысай аңыбыҙҙа моңһоу көҙ башы булып кәүҙәләнһә лә, уның тәүге көнөндә туған мәктәптәребеҙҙә яңғыраған "Ҡыңғыраулы мәктәп йылдары" йырынан, ҡупшы кейенешеп, гөлләмәләр тотҡан балалар ағымынан, күҙгә иртәнең һалҡынса сафлығынан күтәренке, дәртле аҙымдарға көйләнеп киткәндәй булаһың. Моңһоулыҡ, әйҙә, йоҡомһорай башлаған тәбиғәткә килешһен, ә беҙҙең йәш быуын таң менән бергә уянып, мәктәбенә - белем усағына ашыға. Улар өсөн миҙгелдең иң ҡыҙыуы, яуаплы осоро башлана ғына.**

Әйткәндәй, 1 сентябрь **Белем көнө** булыуҙан тыш, белем айында тағы ла **Халыҡ-ара наҙанлыкта бөтөрөү көнө** (8) лә билдәләнә һәм был ике дата ауаздаш. Хәйер, хәреф танымаған, яҙа-һыҙа белмәгән әҙәм беҙҙә һирәктер, мәгәр планетабыҙҙың цивилизациянан ситтә ҡалған бәғзе "джунгли-утрауҙарында" тома наҙанлыҡ ғәләмәте барҙыр ҙа, сөнки ундай төбәктәрҙә белем алыу өсөн шарттар ҙа, мөмкинлек тә юҡтыр. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, Ер йөҙөндә бөгөнгө көн 860 млн өлкән кеше грамотаһыҙ (улар нигеҙҙә ҡатын-ҡыҙ, үсмерҙәр, фәҡирҙәр), ә бына Африка, Көньяҡ Америка илдәрендә, Һиндостанда һәм башҡа илдәрҙә 100 миллионлап бала мәктәпкә йөрөмәй. Беҙҙең илдә грамотаға әйә булыу мәсьәләһе тормаһа ла, наҙанлыҡ тигән нәмә бик аптырата ҡайсаҡ. Беҙҙең өсөн уҡый-яҙа белеүҙе генә белемлегә иҫәпләп булмауы бәхәсһеҙ. Бөгөнгө йәмғиәтебеҙ граждандарына бөтә өлкәләрҙә лә: сәйәсәт, иҡтисад, мәҙәниәт һәм айырыуса тарих ( бигерәк тә ватаныбыҙ һәм туған халҡыбыҙ тарихы) буйынса грамоталылыҡ кәрәк. Шул уҡ ваҡытта грамоталылыҡ иң тәүҙә туған телендә камил белеүҙе лә күҙҙә тота. Бынан тыш, мәғлүм булыуынса, 2024 йылға Рәсәй Президентының май указына ярашлы, илебеҙ технологик грамоталылыҡ йәһәтенән донъяла алдынғылар рәтенә сығырға тейеш. Үкенескә, был йүнәлештә беҙҙең Башҡортостанда эштәр тейешле кимәлдә алып барылмай, тип билдәләне уҡытыусыларҙың быйылғы республика август кәңәшмәһендә республика Башлығы Р. Хәмитов. Башҡортостанда техник йүнәлештә әлеге көндә уҡыусыларҙың ни бары 10 проценты ғына шөғөлләнә һәм өс кенә балалар технопаркы эшләй, тине ул. Техник белем мәсьәләһе иң тәүҙә шулай ҙа дөйөм белем биреү мәктәптәре эшенә, уның физика, математика, химия, биология, информатика уҡытыусыларының белем, тәжрибә һәм оҫталыҡ кимәленә бәйле. Ә инде мәктәптәрҙә бөтөн фәндәрҙе лә тип әйтерлек ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар алып барыуын иҫкә төшөрһәк, балаларҙы техник "осошка" әҙерләү уларҙың ғына ҡулынан килмәҫе асыҡ. Үҙе лә техника менән мауыҡҡан, уйлап сығарыусы һәм фантазияға бай, ҡулдарында ут уйнатыр ир-егет уҡытыусылар булһа, әлеге технопарк майҙансыҡтарын улар үҙ мәктәптәре сиктәрендә лә ойоштороп ебәрә алыр ине. Юғиһә, **күпселек мәктәп коллективтары бөгөн үҙ эшмәкәрлеген фәҡәт туған телдәрҙе уҡытыуға ҡаршы көрәшкә туплап, көн тәртибендәге башҡа мәсьәләләрҙән ситләшә төштө, буғай. Асылда, уҡыусыларҙы гуманитар һәм техник йүнәлештәрҙә берҙәй уҡ алдынғы ҡарашлы граждандар итеп тәрбиәләүҙең төп бурыс икәнен аңлап еткермәүсе мәктәп директоры йә уҡытыусы үҙенең аң кимәлен үҙе фашлай түгелме?**

Белем, тигәндән, уның һайлығы бөгөн айырыуса ҡайһы бер тарихи ваҡиғаларға ҡарата мөнәсәбәттән дә күренә. Мәҫәлән, икенсе Бөтә донъя һуғышы (1939 йылдың 1 сентябрендә башланып, 1945 йылдың 2 сентябрендә тамамлана), шуның менән бәйле Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын, фашистик Германияны ҡыйратыуҙа Советтар Союзы ролен боҙоп күрһәтеүҙәр көнбайыштың быҫраҡ сәйәсәте тирмәненә һыу ҡоя ла инде.

Белем тигәнен көндәлек тормошобоҙҙа ла кәрәк булып ҡына тора. Мәҫәлән, һеҙ тәүге медицина ярҙамы күрһәтә беләһегеҙме? Юҡ икән, 8 сентябрь был йәһәттән тәжрибә мәктәбе үтә алаһығыҙ, сөнки был көн **Бөтөн донъя тәүге медицина ярҙамы күрһәтеүгә** бағышлана.

Һарысай календарында йыл һайын **Бөтөн донъя матурлыҡ көнө** (9) билдәләнә, тик бына тормошобоҙҙа ул бер ниндәй ҙә сағылыш тапмай, шым ғына үтеп китә. Был көн сибәркәйҙәр дефилеһы үткәреү мәшәҡәттәренә түгел, ә гөмәлдәре, уйы, холҡо йәһәтенән матур кешеләр менән осрашыуҙарға бағышланһа ине; театрҙар, музейҙар, картина галереялары ишектәрен бушлай асып, үҙҙәренә саҡырып торһа ине... Үкенескә, матурлыҡ төшөнсәһен бөгөн ярым-яланғас ҡатын-ҡыҙ тәнендә күрергә генә ғәҙәтләнде замандаштар. Әйткәндәй, матурлыҡтың тағы бер миҫалы - шәфҡәтлелек, изгелек ғәмәле. 5 сентябрь **Халыҡ-ара хәйриә көнө** булараҡ, тап ана шундай матурлыҡты кәүҙәләндерә. Нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт, ә бына айыҡлыҡ - матурлыҡмы? Әлбиттә! Эсмәгән-тартмаған, ғаиләһе өсөн өҙөлөп торған, эш һөйгән кеше ин матурылыр ҙа әле. 11 сентябрь - **Айыҡлыҡ көнө** ана шундайҙарҙы ҙурлайыҡ, әйҙәгеҙ. Улар былдай ихтирамға лайыҡ.

Үкенескә, һарысай календарында бер ҡасан да тормошҡа ашмаҫ көн дә билдәләнә. Кәрәкле сара булыуҙан фажиғә сығанағына әйләнеп, күптәрҙең ғүмерҙәрен өҙөүсе, байтаҡтарҙы рәшәткә артына оҙатыусы афәт - автомобиль. Айыҡ, ышаныслы ҡулдарҙа ул, әлбиттә, юлдарҙы ҡыҫҡарта, ваҡытты экономиялай, ләкин бензинды ла күп "ашай". Үҙебеҙҙең Өфө урамдарын ғына алайыҡ: аварияһыҙ көн юҡ. Шуға ла Бөтөн донъя кимәләндә **Автомобилһеҙ көн** (22) иғлан итергә ҡарар ҡылынған икән, яҡшы ниәт, тик ул ни бары ниәт кенә булып ҡала. Йәйәү йөрөүҙе оноҡҡан, ҡорһаҡ үстергән, күҙе тонған ҡайһы берәүҙәр машиналары креслоһына ҡуша йәбешкән, ғүйә: бер көн түгел, бер сәғәтҡә лә айырыла алмай улар хәүефле "уйынсыҡ"тарынан. Артһа, арта ғына бирһен әйҙә бензинға хаҡ, бәлки, шул саҡ, ниһайәт, күрергә насип булыр беҙгә автомобилһеҙ көндәрҙе.

Әйтелгәндәрҙән сығып, **Бөтөн донъя тәрбиәсе көнөндә** (27) йәмғиәтебеҙҙә тәрбиә кимәле хаҡында уйланырға нигеҙ бар: ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә, урамда... Шул уҡ ваҡытта бөтәһен дә пассив тәрбиәгә ауҙарыу ҙа дөрөҫ булмаҫ, сөнки уның файҙаһыҙға булыуы ла ихтимал, әгәр кеше үҙ-үҙен тәрбиәләмәһә, аң-белем кимәлен камиллаштырмаһа. Юғары аң кимәлнә эйә кешелек хайуандар донъяһынан тап шуның менән айырыла түгелме? Әйткәндәй, **Бөтөн донъя йөрәк көнө** (29) лә бар календарҙа. Йөрәктәрегеҙҙе һаҡлағыҙ, йәмәғәт, сөнки кешелеклелек асылын белем дә, аң да түгел, ә йөрәк билдәләй.

**Был айҙа ла байтаҡ һөнәри байрамдар.** Улар: нефть һәм газ сәнәғәте һәм Патруль-пост хеҙмәте (2), Финанс хеҙмәткәрҙәре (8), Танкистар (9), Сәс алыу оҫталары (13), Урман эшсәндәре (16), Бөтөн донъя тәрбиәселәр (27), Машина эшләүселәр (30) көндәре.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**1** - медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, гигиена табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Тәлғәт ЗӨЛҠӘРНӘЕВҡа - 75 йәш** (1943).

**3** - педагог, балалар яҙыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Айһылыу ЙӘҒӘФӘРОВАға - 70 йәш** (1948).

**7** - шағир, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, II дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры **Яҡуп ҠОЛМОЙҘОҢ (Ҡолмөхәмәтов)** тыуыуына **- 100 йыл** (1918-1994).

**10** - Башҡортостандың халыҡ шағиры, журналист, 1978-1999 йылдарҙа "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, 1990-1995 йылдарҙа РСФСР Юғары Советы ағзаһы һәм халыҡ депутаты, Почет билдәһе ордены кавалеры, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Һ. Дәүләтшина һәм М. Аҡмулла исемендәге республика премиялары лауреаты **Гөлфиә ЮНЫСОВАға - 70 йәш** (1948).

**15** - ҡурайсы, актер, йырсы-импровизатор, композитор, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ишмулла ДИЛМӨХӘМӘТОВтың** тыуыуына **- 90 йыл** (1928-1984).

- прозаик, Ғ. Сәләм премияһы лауреаты, I дәрәжә Ватан һуғышы, I дәрәжә Дан һәм Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры **Ибраһим ҒИЗЗӘТУЛЛИНдың** тыуыуына **- 100 йыл** (1918-1992).

**23** - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Илдар ҒҮМӘРОВҡа - 60 йәш** (1958).

**25** - хеҙмәт ветераны, Учалы районының элекке Ленин исемендәге колхозы чабаны, йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөтә Союз, Бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты, Учалы районының почетлы гражданы **Абдулла СОЛТАНОВҡа - 90 йәш** (1928).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда туристар өсөн Ҙур Көньяҡ Урал һуҡмағын һалалар. Походҡа Рәсәй география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе һәм Башҡортостан Экология министрлығы белгестәре сыҡты. Маршрут Белореттан башлана, Еләктау түбәһе аша бара, Отнурок ауылына төшә, һуңынан Яланғас тауы аша Торналар һаҙлығына үтә. Артабан маршурт Инйәр тештәре, Көмәрҙәк һәм Баштау һырттары аша "Ирәмәл" тәбиғәт паркы аша уҙа. Маршрут оҙонлоғо яҡынса 140-150 саҡрым тәшкил итә. Походта ҡатнашыусыларҙың маҡсаты - маршрутты маркировкалау, билдәләр эшләү, уның тасуирламаһын һәм картаһын әҙерләү.

✓Кәрәҙле элемтә операторҙарының береһе юғалған балаларҙы эҙләү өсөн "ҙур мәғлүмәттәрҙе" (big data) анализлау технологиялары ярҙамында махсус платформа уйлап сығарҙы. Оператор был мәғлүмәттәрҙе эшкәртеп, SMS аша юғалған баланың фотоһын ул юғалған ваҡытта уның янында булыуҙары ныҡ ихтимал кешеләргә ебәрә ала. Уйлап сығарыусылар был сара кешене эҙләү өлгөрлөгөн тиҙләтә алыр тип иҫәп тота. Яҡын ваҡытта платформа һынау үтә башлай.

✓Белем көнөндә, 1 сентябрҙә, Күгәрсен районының Мәксүт ауылындағы дөйөм урта белем биреү мәктәбенең спорт залы ла балалар өсөн үҙ ишектәрен асa. Ул "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Балалар спорты" проекты, шулай уҡ депутат наказына ярашлы ремонтланған. Ремонтҡа төрлө кимәлдәге бюджеттарҙан 1,117 миллион һум бүленгән. Уларҙың күпселек өлөшө федераль бюджеттан алынған - 934 мең һум, ҡалғаны - республика һәм урындағы ҡаҙнанан: 127 мең һәм 56 мең һум. Әлеге объект - һайлаусыларҙың Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровҡа наказы. Эштәр барышын ул үҙе күҙәтте. "Нур" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте белгестәре ҡыҫҡа ваҡыт эсендә еләтеү, йылытыу системаһын тәҙәкләндерҙе, түшәмде көпләне, стеналарҙы һыланы һәм буяны. Залда спорт тамғаларын һыҙырға ғына ҡалды. Быйылғы уҡыу йылында мәктәптә 186 бала белем ала. Спорт залында Сапыҡ, Ерекле, Үрге Һаҙ һәм Назаркин ауылы мәктәптәре уҡыусылары ла шөғөлләнер тип күҙаллана - дөйөм саралар уҙғарғанда 270-тән ашыу бала, тип хәбәр иттеләр муниципалитет хакимиәтенән.

✓ *Өс балаһы бар икән - өс йылға, дүрт балаһы булғандар дүрт йылға алдан сыға ала. Ә инде биш һәм унан да күберәк балалы ҡатындар өсөн бөтәһе лә әлегесә ҡалырға тейеш: улар пенсияға 50 йәштән сыға ала.*



КӨНАУАЗ

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА...

## уңыштар, ҡаҙаныштар юлдаш булһын!

(Башы 1-се биттә).

Башстат Рәсәй Мәғариф министрлығына һылтанып хәбәр итеүенсә, 2017-2018 уҡыу йылында Башҡортостанда 1318 мәктәп иҫәпләнгән, уларҙа 468 меңдән ашыу кеше белем алған. Юғары кимәлдәге программалар буйынса гимназия кластарында - 49 меңдән ашыу, лицей кластарында - 40 мең, айырым фәндәрҙе тәрәнерәк өйрәнеү кластарында туғыҙ мең самаһы бала уҡыған. Уҡыусыларҙың төп өлөшө дәүләт һәм муниципаль мәктәптәрҙә белем алған. Башҡортостанда 1,1 мең уҡыусы йәки уҡыусыларҙың дөйөм һанынан 0,2 проценты дәүләткә ҡарамаған мәктәп хеҙмәттәре менән файҙаланған. Республикала белем биреү рус, башҡорт, татар, сыуаш, удмурт телдәрендә алып барыла. Бынан тыш, мари, мордва, немец, украин, латыш телдәре фән булараҡ өйрәнелә.

Студенттар һанына килгәндә, әле Башҡортостанда 112 белем биреү ойошмаһы иҫәпләнә, шуларҙың етеүһе - шәхси. Улар урта звено белгестәрен һәм квалификациялы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр әҙерләү менән шөғөлләнә. 2017-2018 уҡыу йылында 74 меңдән ашыу студент урта звено белгестәрен әҙерләү программалары буйынса урта һөнәри белем алған. Квалификациялы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр әҙерләү программалары буйынса - 28 меңгә яҡын студент. Республика вуздарында, уларҙың икеүһе дәүләткә ҡарамай, шулай уҡ юғары уҡыу йорттарының 22 филиалында 103,6 мең студент белем алған. Дәүләт вуздарында - 95,8 мең кеше, дәүләткә ҡарамаған юғары уҡыу йорттарында - 7,8 мең, тип белдерҙе статистиктар.

Һәм тағы. Беренсе класс уҡыусылары быйыл 33 аҙна, 2-8 кластар - 35 аҙна, өлкән кластар 34 аҙна уҡый. Көҙгө каникулдар 28 октябрҙә башлана һәм һигеҙ көн дауам итә; ҡышҡыһы 31 декабрҙә башлана һәм 13 ғинуарҙа тамамлана; яҙғыһы 24 марттан 31-нә тиклем, йәйгеһе гәҙәттәгесә 1 июндә башлана һәм яңы уҡыу йылына тиклем дауам итә. Шулай уҡ уҡыусыларҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен түбәндәге байрамдар унайынан ял көндәре көтә: 11 октябрь - Башҡортостан Республикаһы көнө, 4 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнө, 23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө, 8 март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө, 1 май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы, 9 май - Еңеү көнө, 4 июнь - Ураҙа байрамы, 12 июнь - Рәсәй көнө, 12 август - Ҡорбан байрамы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕНСИЯ ЙӘШЕ... ҮҘГӘРӘМЕ?

**29 августа РФ Президенты Владимир Путин пенсия реформаһы мәсьәләләре буйынса телевидение аша Рәсәй халҡына мөрәжәғәт итте.**



Ил башлығы иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн закон проектында ҡаралған пенсия йәше мөҙҙәте хаҡында айырым әйтеп китте: "Беҙҙең илдә ҡатын-ҡыҙҙарға айырым, һаҡсыл мөнәсәбәт йәшәп килә.Улар үҙҙәренең эш урындарында ғына түгел, ҡағиҙә булараҡ, йорт хужалығын да алып бара, ғаиләһе хаҡында ла хәстәрлек күрә, балаларын тәрбиәләй, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарай. Уларға пенсия йәшен арттырыу ирҙәрҙекенә ҡарағанда күберәк булырға тейеш түгел", - тине Президент һәм пенсияға сығыу йәшен ҡатын-ҡыҙҙарға - 60, ә ирҙәргә 65 йәшкә тиклем арттырырға тәҡдим итте. "Пенсия йәшен арттырыу зыянлы производствола эшләгән, шулай уҡ Себерҙә йәшәгән аҙ һанлы төп халыҡтарға ҡағылмай", - тип билдәләне дәүләт башлығы.

Владимир Владимирович әйтеүенсә, күп балалы әсәләр ваҡытынан алда пенсияға сығасаҡ. Өс балаһы бар икән - өс йылға, дүрт балаһы булғандар дүрт йылға алдан сыға ала. Ә инде биш һәм унан да күберәк балалы ҡатындар өсөн бөтәһе лә әлегесә ҡалырға тейеш: улар пенсияға 50 йәштән сыға ала.

Элекке закон буйынса яҡындағы ике йылда пенсияға сығырға тейешле граждандар өсөн айырым ташламалар булдырыла. Улар пенсияға яңы пенсия йәшенән 6 айға алдараҡ сыға ала.

Владимир Путин Хөкүмәткә пенсия алды йәшендәге граждандар өсөн квалификацияны күтәреү буйынса махсус программаны раҫларға ҡушты: "Әгәр пенсия алды йәшендәге кеше үҙ теләге менән эштән китергә хәл иткән һәм әлегә яңы эш тапмаған икән, был осраҡта ла беҙ уның социаль гарантияларын нығытырға тейешбеҙ. Шуға бәйле пенсия алды йәшендәге граждандар өсөн эшһеҙлек буйынса пособиеның максималь күләмен ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа - хәҙерге кеүек 4 мең 900 һумдан 2019 йылдың 1 ғинуарынан 11 мең 280 һумға тиклем - арттырырға һәм ошондай түләү осорон бер йылда билдәләргә тәҡдим итеlә", - тине дәүләт башлығы.

Пенсия алды йәшендәге кешеләр өсөн өҫтәмә яҡлау саралары булдырыла. Уларҙы эштән сығарғаны, шулай уҡ йәше сәбәпле уларҙы эшкә алыуҙан баш тартҡаны өсөн эш биреүселәргә ҡарата административ һәм хатта енәйәт яуаплылығы ҡараласаҡ.

Ауыл халҡына ташламалар ҡараласаҡ. Ауыл хужалығында 30 йылдан да кәм эшләмәгән һәм ауылда йәшәгән, әлеге ваҡытта эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховкалы пенсияларына 25 процент өҫтәмә түләргә тәҡдим бар.

2018 йылдың 16 июненә ҡарата ғәмәлдә булған бөтөн федераль ташламалар пенсия системаһындағы үҙгәрештәр тамамланғанға тиклем һаҡланып ҡаласаҡ.

Ил Президенты Владимир Путиндың тәҡдимдәре закон проектына төҙәтмәләр рәүешендә ошо араларҙа РФ Дәүләт Думаһына индереләсәк.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# АҘ СЫҒЫМДАР МЕНӘН...

## ҙур эштәр башҡарырға мөмкин

**Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә башҡа мәсьәләләр менән бер рәттән, баш ҡаланың үҙәге булып торған Совет районында "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" проекты һәм урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы буйынса ихата территорияларын капиталь ремонтлау буйынса алып барылған эшмәкәрлек барышы тураһында район хакимиәте башлығы Урал Килсенбаев сығыш яһаны.**

- Дөйөм алғанда, Совет районында 666 ихата бар, бөгөн шуларҙың 164-е ремонтҡа мохтаж. Ә инде 21-е быйылғы планға индерелгән, - тип билдәләне Урал Таһир улы. Уның әйтеүенсә, ихаталарҙы ремонтлағандан һуң парковка урындары барлыҡҡа килә, сүп-сар йыйыу өсөн контейнер майҙансыҡтары, яҡтылыҡ сығанаҡтары, балалар майҙансыҡтары яңыртыла, йорттарға инеү урындары ремонтлана, йәшелләндереү эштәре алып барыла. Был эштәр "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" проекты, шулай уҡ Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы буйынса тормошҡа атҡарыла.

- Ҡайһы бер ихаталарҙа күп фатирлы йорттарҙа йәшәүсе милекселәр, ремонт эштәре сиктәрендә ҡаралмағанлыҡтан, парковка урындарын үҙҙәре билдәләп, буяп сыға. Һөҙөмтәлә автомобиль хужалары транспорт сараларын дөрөҫ итеп ҡуя, был үҙ сиратында өҫтәмә парковка урындары булдырыу мөмкинлеген бирә, - тине Урал Таһир улы. - Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: унайлы ҡала мөхите программаһын тормошҡа ашырғанда, ремонт барған ихаталарҙа видеокүҙәтеү системалары ҡуйыла һәм ихатала барған ремонт эштәрен граждандар онлайн режимында күҙәтеп бара ала. Ике проект та халыҡтың финанслашташ булып сығыш яһауы ярҙамында тормошҡа ашырыла. Һәр кем индергән ҙур булмаған сумма ҙур эштәр башҡарырға ярҙам итә, сөнки унайлылыҡ бит фатир эсе менән генә тамамланмай. Ремонт эштәренән һуң муниципаль учреждениелар, йәштәр ойошмалары, халыҡтың үҙе ҡатнашлығында Ихата байрамдары ойошторола. Унда граждандар үҙҙәре йәшәгән территорияның, ысынлап та, сифатлы яҡҡа үҙгәреүен күрә...

Кәңәшмәне алып барыусы Өфө ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов та Совет районында ҙур күләмле эштәр алып барылыуы менән килеште һәм проекттар тормошҡа ашырылғанда халыҡтың мөмкин тиклем күберәк теләге иҫәпкә алынырға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ Салауат Сәхи улы ихата территорияларын ремонтлағанда уларҙы ҡышын таҙартыу унайлылығы тураһында ла онотмаҫҡа саҡырҙы, ихтибарҙы подъездан сығыу урыны автомагистралдәргә яҡын булған йорттарҙа йәшәгән граждандарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә, ихаталарҙы төҙөкләндереү һәм ремонтлау буйынса эштәрҙең ваҡытында һәм сифатлы башҡарылырға тейешлегенә йүнәлтте.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Күмертау авиация етештереү предприятиеһының Ка-32 вертолеттары Төркиәнең эҙләү-ҡотҡарыу хеҙмәттәре паркын тулыландырасаҡ. Төрөк Республикаһына өс вертолет оҙатыу күҙаллана. Күмертау авиация производство предприятиеһы Төркиәнең Kaan Air компанияһы өсөн күп маҡсатлы Ка-32А11ВС вертолеттарын етештереүгә заказ алғайны. Быйыл Көньяҡ-Көнсығыш Азия илдәренә лә ошондай ике вертолет оҙатылға. Бындай вертолет кешеләрҙе ҡотҡарыу, урман янғындарын һүндереү һәм бейек биналарҙа ут менән көрәшеү өсөн бик ҡулай. Ка-32А11ВС вертолеты Рәсәйҙә, Канадала, Испанияла, Португалияла, Швейцарияла, Ҡытайҙа, Көньяҡ Корeяла, Индонезияла ҡулланыла.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Саксония Ландтагының (Германия Федератив Республикаһы) рәсми делегацияһы менән осрашты. Делегацияның етәксеһе - Саксония парламенты ағзаһы, тирә-яҡ мөхит һәм ауыл хужалығы мәсьәләләре буйынса комитет рәйесе Себастиан Фишер. Төбәк етәксеһе Башҡортостан менән Саксония алып барырға ниәтләгән берлектәге эшмәкәрлектең төп йүнәлештәрен билдәләне. Улар - машиналар эшләү, юғары технологиялар, химия сәнәғәте, ауыл хужалығы, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау. Шулай уҡ фән, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте, йәмәғәт башланғыстарын хуплау өлкәләрендә үҙ-ара эш итеү тураһында һүҙ бара.

✓Интернетта цифрлы форматҡа күсерелгән бер нисә башҡорт фильмы барлыҡҡа килде. Улар - "Быяла юлсы" (1996), "Ауыл өҫтөндә йәйгор" (2000), "Сөмбөләдәң етенсе йәйе" (2002) нәфис фильмдары һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосоповҡа арналған "Ваҡыт каруаны" (2002) документаль фильмы. Бөтөн таҫмалар ҙа "Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән. Режиссеры - Булат Йосопов. Был проект Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре өсөн республика башлығы гранты булышлығында тормошҡа ашырылды.

✓Башҡортостанда сентябрҙең беренсе аҙнаһы йылы буласаҡ тип фаразлана. "Гисметео" порталы мәғлүмәттәре буйынса, көҙ башында термометр бағанаһы +23 градусҡа етеүе мөмкин, 4 сентябрҙә ошондай һауа торошо көтөлә. Төбәктә сентябрь уртаһына ҡәҙәр йылы буласаҡ. Ләкин ваҡыты менән яуымтөшөм һәм дауыл булыуы бар. Башгидрометүҙәк мәғлүмәттәре буйынса, республика биләмәһендә һауа температураһы нормаға ярашлы (8-12 градус) була. Яуым-төшөмдең дә нормаға яҡын булыуы фаразлана (30-70 миллиметр).

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Яңы уҡыу йылы башланыр алда Өфө ҡалаһының мәғариф хеҙмәткәрҙәре август кәңәшмәһенә йыйылды. Унын сиктәрендә "Конгресс-холл" бинаһында көн дауамында күргәҙмәләр, фекер алышыу майҙансыҡтары эшләне. Кәңәшмәлә БР Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов, БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, баш ҡала мәғариф учреждениелары етәкселәре, педагогтар ҡатнашты.**



# ТУҒАН ТЕЛ МӘСЬӘЛӘҺЕ...

## телдән төшә лә ҡала

Башы ҡайҙа - ҡойроғо шунда, тигән кеүек, баш ҡала мәғарифы өлкәһендәге бөтә төр үҙгәрештәр бер ни тиклем ваҡыт үтеү менән республиканың башҡа ҡала, район кимәленә барып етә. Шуға ла белем биреүҙә алдынғы технологияларҙы ҡулланыу, заман талаптарына яраҡлашыу, алдынғы уҡытыу методикаларын үҙләштереү кеүек һыҡай йүнәлештәге яңылыҡтар хәҙер баш ҡала мәктәптәренә генә хас түгел. Әммә Өфөнөң мәғариф учреждениелары электрон белем биреүҙе ойоштороу, хәүефһеҙ мөхит булдырыу, өҫтәмә белем биреү һәм балаларҙың һәләттәрен үҫтереү йәһәтенән, һис шикһеҙ, республика буйынса ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә лә алдынғылар рәтендә. Шуға август айының унынсы көнөндә үткәрелгән республика мәғариф хеҙмәткәрҙәренең кәңәшмәһендә ошо темаларға арналған фекер алышыу майҙансыҡтарында күпселек Өфө уҡытыусыларының эш тәжрибәһе сағылыш тапҡайны.

Уҡыусыларға өҫтәмә белем биреү тураһындағы Өфө ҡалаһы хакимиәтенән алынған мәғлүмәттәрҙе генә миҫалға килтереп үтәйек. Әлеге көндә Өфөлә 46 өҫтәмә белем биреү учреждениеһы, балаларҙың өлгөлө 14 вокал һәм бейеү коллективтары, 13 инновацион майҙансыҡ эшләй, 103 социаль әһәмиәтле проект тормошҡа ашырыла, ә буш ваҡыттарында төрлө шөғөлдәр менән булышыусы уҡыусылар һаны 64 меңдән ашыу. Әйткәндәй, дөйөм уҡыусылар һаны 117 меңгә яҡын. Был күрһәткестәр йылдан-йыл яҡшыра барыуы ла билдәле, сөнки мәғариф өлкәһендәге әһәмиәтле бөтә сарала рҙа ла Өфө ҡалаһы буйынса статистик мәғлүмәттәр яңыртыла тора.

Ә шулай ҙа августа булған мәғариф кәңәшмәләрендә бөтәһе лә түҙемһеҙлек менән көтөп торған тема - туған телдәрҙе уҡытыуға ҡағылышлы һорау ҡуҙғатылмауы ғына аптырауға һала. Ярай әле, был юлы республика педсоветы алдынан БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова ҡатнашлығында милли мәғарифҡа арналған сара ойошторолдо. Тик был сарала күтәрелгән мәсьәләләр, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың һөҙөмтәһе тураһында әлегә дөйөмләштерелгән һөйләшеү булманы. Өфө ҡалаһында туған телдәрҙе уҡытыу Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (ФГОС) талаптарына ярашлы ойошторолған, күптән системаға һалынған, тип иҫәпләнә. Әммә "Туған тел" Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса мотлаҡ өйрәнелергә тейешле предметтар исемлегенә индерелһә лә, баш ҡала мәктәптәрендә һәм бөтә Башҡортостан буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеүҙе, йә баланың уҡыуын еңеләштереүҙе һылтау итеп, ата-әсәләр "Туған урыҫ теле" предметын һайлауҙары тураһында ғаризалар яҙыу осраҡтары йышайҙы. Ул ғына ла түгел, кәңәшмәләрҙә белем биреү учреждениеларының ата-әсәләр менән килешеп, тығыҙ бәйләнештә эшләүен ойоштороу тураһында фекер алышынһа ла, балаһына башҡорт телен уҡытыуҙы талап итеүселәр менән күп етәкселәрҙең борсаҡтары бешеп етмәй. Һуңғы ваҡытта эш ата-әсәләр менән конструктив һөйләшеүгә ҡарағанда, мәктәп етәкселегенә уңайлы булған варианттарҙы һайлатыу өсөн өгөтләүҙәргә ҡайтып ҡала башланы, тиһәк тә хата булмаҫ. Сөнки сентябрь айы яҡынлашыу менән "Киске Өфө" гәзите редакцияһына шундай осраҡтар тураһында хәбәр итеп шылтыратыусылар ҙа күбәйә. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы буйынса күптән түгел Нуғай ауылындағы 147-се мәктәп ата-әсәләре шылтыратып, башҡорт телен өйрәнергә теләүсе балалар һаны етерлек булыуға ҡарамаҫтан, директор менән уҡытыуҙы ойоштороу тураһында килешә алмауҙары тураһында һөйләнеләр. Башҡорт дәүләт телен дә уҡытырға теләмәгән белем усаҡтары бар, улар ата-әсәләргә "Уфаведение" дәресен үткәреүҙе тәҡдим итә. Бындай осраҡтарҙа, әлбиттә, ныҡышып, белем усағы етәкселеге менән мөнәсәбәттәрен боҙоп йөрөргә теләмәгәндәр тиҙ генә урыҫ телен туған тел булараҡ уҡырға ризалыҡ биреп тә ҡуя. Мәғариф учреждениеларының ата-әсәләр менән килешеп эшләүе тураһындағы фекер алышыу майҙансығында бына ошо юҫыҡтағы мәсьәләләр күтәрелергә тейеш ине ул. Сөнки баш ҡала ата-әсәләре белем биреү учреждениеларындағы шарттарҙы, ҡала бюджетынан биналарҙы ремонтлауға, хәүефһеҙ мөхит булдырыуға, мөмкинлектәре сикле балаларға уңайлыҡтар тыуҙырыуға, туҡландырыу һәм спорт менән шөғөлләндереүгә йылдан-йыл күберәк аҡса бүленеүен былай ҙа баһалай ала. Ә бына башҡорт балаларының үҙ туған телендә белем алырға законлы хоҡуғы барлығы тураһында юғары вазифалағыларҙың юғары трибунанан бер генә тапҡыр булһа ла әйтеп ҡуйыуы күп мәсьәләне хәл итер ине һымаҡ...

**Әйткәндәй, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова, милли мәғариф өлкәһендә туған телдәрен өйрәнгән балалар һанын кәметмәй һаҡлап ҡалыу актуаль мәсьәләгә әйләнеп бара, тип белдерҙе белдереүгә кәңәшмә барышында. Ләкин был проблема атай-әсәйҙәр ирке менән генә хәл итерлек түгел барыбер - шуға төшөнөргә ваҡыт.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ ГРАЖДАНЫ

**Ҡала округы Советының сираттағы ултырышында депутаттар шундай ҡарар ҡабул итте: Рәшит Шәкүргә Өфө ҡалаһының Почетлы гражданы исемен бирергә.**

Рәшит Закир улы Шәкүровты Башҡортостанда белмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Ул - республикала билдәле шағир, яҙыусы, публицист, ғалим-энциклопедист, педагог, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ ҡына түгел, ә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимнының һүҙҙәренең авторҙашы булараҡ та билдәле. Рәшит Шәкүров ете монография, 400 фәнни баҫма авторы. Бынан тыш, ул матбуғатта башҡорттарҙың һәм Башҡортостандың әҙәбиәте, топонимикаһы, диалектологияһы, халыҡ ижады, тарихы һәм рухиәте тураһында меңгә яҡын мәҡәлә баҫтырған. Башҡорт әҙәбиәте тарихына тос өлөш индереп, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тормош һәм ижад юлын өйрәнә. Һөҙөмтәлә "Шиғриәт йондоҙо" тип аталған монографияны тарих һәм мәҙәниәт уҡытыусылары өсөн ҡиммәтле әсбап булып тора, өс тапҡыр нәшер ителә. Рәшит Шәкүр төрлө наградалар һәм Маҡтау ҡағыҙҙарына эйә, шулар араһында иң ҙур награда - ул Салауат Юлаев ордены (2007). Ғүмер буйы Өфөлә йәшәп, шунда хеҙмәт иткән кеше булараҡ, барлыҡ наградаларына өҫтәлгән ҡаланың Почетлы гражданы исемен дә ул ҙур бүләк итеп ҡабул итә.

Һәм тағы. Былтыр Өфө урамдарына исем биреү буйынса конкурс иғлан ителгәс, унда ҡатнашып, Йомадил Йомағужин алты еңеүсенең береһе булғайны. Конкурс һаман да дауам итә һәм милләттәшебеҙ үҙенең тәҡдимдәрен конкурс комиссияһына еткереп тора. Ошо көндәрҙә үткән ҡала округы Советы ултырышында башҡа исемдәр менән бер рәттән, ул тәҡдим иткән Тәньяҡ амурҙары атамаһы раҫланды. Ул Калинин районы составына ингән Самохваловка ауылы урамдарының береһенә бирeләсәк. Шулай уҡ яңы ауылда Асылыкүл, Ҡорғаҙаҡ, Мораҙым, Нөгөш урамдары ла барлыҡҡа киләсәк.

# МӨРӘЖӘҒӘТТӘР КИЛӘ...

**Өфө ҡала хакимиәтенә йылдың тәүге яртыһында барлығы 16550 мөрәжәғәт килгән, шул иҫәптән 106-һы һорауға яуап биреү өсөн компетенция буйынса икенсе ведомстволарға ебәрелгән.**

Мөрәжәғәттәрҙең 46,8 проценты (7754) электрон документ формаһында килгән, шул иҫәптән 2614 электрон мөрәжәғәт Өфө ҡала хакимиәтенең рәсми сайты аша алынған. Мөрәжәғәттәрҙе йөкмәткеһе буйынса өс төркөмгә бүлергә мөмкин: белдереүҙәр (16348 - 98,8 процент), ялыуҙар (148 - 0,89 процент), тәҡдимдәр (54 - 0,32 процент). Нигеҙҙә граждандар торлаҡ, коммуналь һәм ҡала хужалығы (37,2 процент), төҙөлөш (24,2 процент), ер менән ҡулланыу (10 процент), торлаҡ шарттарын яҡшыртыу (9,7 процент), хоҡуҡ һәм тәртип (4,2 процент) мәсьәләләрен күтәрә. Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, мөрәжәғәттәр буйынса хакимиәттәр хеҙмәткәрҙәре граждандарҙы шәхсән ҡабул итә. Ярты йылда 1425 кеше ҡабул ителгән. Халыҡҡа уңайлы булһын өсөн шәмбе көндәрендә өҫтәмә ҡабул итеүҙәр үткәрелә.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Стенокардия

❖ Стенокардия - йөрәктең ишемия ауырыуы формаһы. Был ваҡытта күкрәк ҡыуышлығына нимәлер баҫҡан кеүек, һөҙөмтәлә тын алыуы ауырлаша. Тире ағара, һалҡын тир бәреп сыға. Ауырыуҙың хәлен еңеләйтеү өсөн түбәндәге дауа ҡулланыла. 100 мл алоэ һуты, 300 г бал, 500 г ваҡланған әстерхан сәтләүеге, 2 лимон һутын ҡушып болғатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ризыҡ ҡабул итерҙән ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1 стакан баланға 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнатып сығарырға, талғын утта 5-10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм 3 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

### Йүткереү

*Бер нисә йылға һуҙылған ҡоро йүткереү менән яфаланыусылар өсөн кәңәш (уны йөрәк йүткереүе тип тә йөрөтәләр): йүткертә башлағас та танау менән йыш-йыш итеп тын алырға. Йүткереү шунда уҡ туҡтай. Ошо рәүешле тын алыу күнегеүҙәре менән был сирҙе еңергә була.

### Быуындар сиренән

❖ 20 грамм ҡылысъяпраҡ (сабельник) тамыры йәки үләнен термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда сирек стакан эсергә.

### Иммунитет өсөн

❖ 1 ҡалаҡ гөлйемеш емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, эмаль һауытта ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта тоторға, 24 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

### Ангина

❖ Ангина һәм стоматит ваҡытында 1-2 ҡалаҡ аҡ сәскәгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һауытта 10-15 минут тоторға, һыуынғас һөҙөргә һәм 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәп, ауыҙ ҡыуышлығын һәм тамаҡты сайҡатырға. Хәл яҡшырғансы дауам итергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ *Шуны ғына әйтә алам: студенттар уҡыуҙы тамамлап, күпселеге Башҡортостаныбыҙға ҡайтты. Мин белгәндәрҙең барыһы ла белемдәрен халыҡ хужалығының мөһим тармаҡтарында ҡулланып, иленә, халҡына хеҙмәт итте.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

**Кисен эшләргә ярамаған эштәр**

- Төнөн көҙгөгә ҡарарға ярамай. Йоҡо булмәһендә көҙгө булырға тейеш түгел, ул кешенең көсөн һура.
- Төнгө ун икенән һуң мунса инергә ярамай.
- Төнөн ҡыҫҡырмайҙар, төнгө тауыш йыраҡҡа китә.
- Төш күрһәң, иң элек изгегә булһын, тип юра. Сит кешегә һөйләргә ярамай, насарға юрауы ихтимал.
- Ҡояш байығас, кешенең урамындағы ҡоҙоғона һыу алырға барырға ярамай. Үҙендекенән дә һыу алырға ярамай.
- Кисен кеше ҡоҙоғона һыу алырға барырға ярамай, имеш, был кеше хәйерсе ҡала, тигән ышаныу бар. Көйәнтәне ҡулбашҡа һалып керергә ярамай, был йорттан мәйет сыҡһын, тип теләү була.
- Эңер төшкәндә, ҡояш байығанда балаларға урамда йөрөргә ярамай, ен ҡағылыуы ихтимал.
- Ҡояш байығас, ен-зәхмәттәрҙең исемен йыш телгә алырға ярамай, былай ҙа улар хаҡында күп һөйләү тыйыла. Сөнки, исемдәрен әйтһәң, улар, нинә саҡыра икән, тип, янына йыйыла, ти.
- Төндә яңғыҙ йырлап йөрөргә ярамай.
- Төнөн тәҙрәгә ҡарарға ярамай.
- Төнөн тәҙрәнән инергә ярамай.
- Төнөн тәҙрәнән ҡарарға ярамай, ҡаҙ бәпкә сығармай, һыйыр быҙаулай алмай.
- Эңерҙән һуң тауыш сығарырға, эш эшләргә ярамай: тимер, таҡта ҡағыу, баҡса ҡаҙыу тыйыла.
- Кис, ҡояш байығас, мал һуйырға ярамай.
- Ҡояш байығас, тышта эшләргә ярамай.
- Кис өйҙә һыҙғырырға ярамай, өй эйәһе асыулана.
- Ишекте бер тапҡыр ғына шаҡыһалар, ишеккә барырға ярамай. Ике тапҡыр ҡаҡһалар, ишекте асырға була.
- Эңерҙә баш тарарға ярамай.
- Эңерҙә кешегә һөт бирергә ярамай.
- Ҡояш байығандан һуң һөт бирергә тура килһә, бисмилла әйтеп, өҫтөнә әйбер һалып бирәһен.
- Һыйыр ағын ҡояш байығас кешегә бирмә - һыйырыңа зыян килер.
- Кисен аҡса бирмәйҙәр, биргән хәлдә лә аҡсаны иҙәнгә һалырға кәрәк.
- Кисен аҡса аҡтармаҫҡа, аҡса йоҡлай, уны маҙаһыҙларға ярамай.
- Аҡсаны кис, ҡояш байығас, кешегә бирмәйҙәр - бәрәкәте китә.
- Ҡул арты ауыр кешегә мал йәки ҡош-ҡорт бирмәйҙәр, бирһәң, бөтән малың унмаҫ, ҡот китә.
- Кисен аҡса һанама, ҡулыңда аҡса тормаҫ.
- Кис иҙән һепермә, фәҡирлек килер.
- Кисен, йә юлға сығыр алдынан тырнаҡ киҫмәйҙәр.
- Эңер төшкәс, иҙән һеперергә, йыуырға, бысраҡ һыу ҙа, сүп-сар ҙа түгергә ярамай - бәхет китә.
- Кисен һауыт-һаба, ризыҡ ябыҡ булырға тейеш.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

ФОТОЛАРҘА - ТАРИХ

**Һирәкләп булһа ла Өфөгә килгәнендә беҙҙең редакцияға ла инеп сыға ул. Заманыбыҙ зыялыларынан булараҡ, әүҙем уҡыусыларыбыҙҙың береһе - физик-математик, профессор, педагог, ҡурайсы, илһөйәр, телһөйәр һәм бик тә баҫалҡы, юғары мәҙәниле, изге күңелле шәхес Мәжит Мәхмүт улы Мәхмүтов. Заманында ул ауыл мәктәптәрен компьютерлаштырыу буйынса ҙур эш башҡарҙы, Сибай институтында уҡытты. Быйыл октябрҙә буласаҡ юбилейы айҡанлы беҙ уның хаҡында күләмле итеп берәй мәҡәлә әҙерләргә ниәтебеҙҙе белдергәс, ул был тәҡдимде уңайһыҙланып ҡына кире ҡаҡты: "Улай килешеп етмәҫ... Яңы уҡыу йылы башланып торған мәлдәрҙә уҡыусы балаларҙы, юғары уҡыу йорттарына ингән студенттарҙы һәм, ғөмүмән, бөтөн студенттарҙы ла ҡотлап, матур теләктәр еткереп, ҡайҙарҙа уҡыуҙарына ҡарамаҫтан, киләсәктә тыуған Башҡортостаныбыҙға әҙерлекле белгестәр булып ҡайтыуҙарын теләп, ошо фотоһүрәтте баҫтырып сығарһаҡ, яҡшыраҡ булыр,- тип, папкаһынан ҙур ғына форматлы фото менән исемлек килтереп сығарҙы. - Быныһы ошо фотолағы кешеләр тураһында үҙем белгән тиклем мәғлүмәттәр һәм исем-шәрифтәре". Был 1968 йылда Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән Башҡортостан егеттәре һәм ҡыҙҙары - студенттар һәм аспиранттарҙың бергә йыйылышып төшкән коллектив фотоһы булып сыҡты. Әйткәндәй, Мәжит Мәхмүт улы үҙе 1965 йылда бөгөн Рәми Ғарипов исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика интернат-мәктәбен тамамлап, М. Ломоносов исемендәге МДУ-ның хисаплау математикаһы һәм кибернетика факультетын, унан аспирантура тамамлай һәм илебеҙҙең ошо төп һәм абруйлы университетында физика-математика фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертацияны уңышлы яҡлай. Шулай итеп, Мәжит Мәхмүтов хәтирәләре менән уртаҡлаша:**

# МӘСКӘҮҘӘ БЕЛЕМ АЛЫП,

## Башҡортостанда йәшәне һәм эшләне улар

- Үкенескә, был фотоға ул осорҙа Мәскәүҙә уҡыған башҡорттарҙың байтағы эләкмәгән, - ти Мәжит Мәхмүт улы. - Мәҫәлән, Вәкил Агишев, Фәүҡәт Ҡыҙрасов, Лера Ҡолмәтова, Батыр Иҫәнсурин, Вәлир Фазлаев, Сәриә Йәнсурина М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетында, Урал Ураҡсин, Светлана Күсимова - архитектура институтында, Ҡәүиә Әбдрәшитова (Ҡыҙрасова) - ҡайҙа уҡығанын асыҡ ҡына әйтә алмайым (Халыҡ хужалығы институтында ине, буғай), Мир Юлдашбаев, Урал Абдуллин, Рафаэль Агишев, Хәйрулла Мортазин аспирантурала уҡыйҙар ине. Беҙ Өфөләге 1-се Башҡорт республика мәктәп-интернатын тамамлаған саҡта бик абруйлы, күренекле педагог Төхвәт Хәлим улы Аслаев уның директоры ине. Ул шәхсән үҙенең тырышлығы менән ошо интернатты башҡортса уҡып (быныһын һыҙыҡ аҫтына алыу кәрәк, сөнки бөгөн атай-әсәйҙәр, туған телдә уҡыһа, балалары юғары уҡыу йорттарына инә алмаҫ, тигән ҡурҡыуға ҡалған бит) тамамлаусы етем йә күп балалы ғаиләләрҙән булғандарҙы йә балалар йорттарынан, район интернаттарынан килеп уҡыған өмөтлө уҡыусыларҙы БАССР Мәғариф министрлығы аша Мәскәү, Ленинград, Свердловск, Дондағы Ростов, Пермь кеүек ҙур ҡалалар вуздарына юллап, артабан белем алыуҙарына һәм республикабыҙға кәрәкле кешеләр булып ҡайтыуҙарына туранан-тура булышлыҡ итә ине. Шул йылдарҙа илебеҙҙең ана шундай ҙур уҡыу йорттарында белем алып сыҡҡан кешеләрҙең дә бергә йыйылып төшкән фотолары булһа, шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитенә ебәреп, иҫтәлектәре менән уртаҡлашһалар, ҡыҙыҡлы булыр ине. Мәскәүҙә ул ваҡытта "Яҡташтар" йәмғиәттәре бөгөнгө кеүек бик көслө булманы, әлбиттә, шулай ҙа беҙ йылына бер нисә тапҡыр булһа ла йыйылып, ошонда, Мәскәүҙә уҡып, эшләп йөрөгән яҙыусылар, артистар менән осрашыуҙар үткәрә торғайныҡ. Мәҫәлән, М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡып йөрөүсе шул заманда уҡ билдәле шағирҙар Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Гнесиндар исемендәге музыка-педагогия институтында уҡыған йырсылар Камил Вәлиев, Ғәлиә Солтанова, Зәки Мәхмүтовтар менән булған осрашыуҙар хәтеремдә ҡалған. Йыл һайын сентябрь урталарында Мәскәү янындағы тәбиғәт ҡосағына сығып, яңы уҡырға килгән йәки күптән уҡып йөрөһә лә, әлегә тиклем күренмәгән студент һәм аспиранттар менән танышыу байрамы үткәрелә ине. Палаткалар ҡороп, төрлө спорт уйындары, ҡурайҙа, гармунда уйнап, йырлашып, бейешеп, усаҡ янында таңды ҡаршылап, бәләкәй һабантуй рәүешендә үткәрелә торғайны осрашыу. Бөгөн шуны ғына әйтә алам: студенттар уҡыуҙы тамамлап, күпселеге ысынлап та Башҡортостаныбыҙға ҡайтты. Мин белгәндәрҙең барыһы ла белемдәрен халыҡ хужалығының мөһим тармаҡтарында ҡулланып, ғүмерҙәре буйы иленә, халҡына хеҙмәт итте һәм ҡайһылары әле лә хеҙмәт итә. Үкенескә, арабыҙҙан мәңгелеккә китеүселәр ҙә бар. Минең теләк: улар хаҡында мөмкин тиклем күберәк кеше белһен, ә йәштәр өлгө алһын ине, тигән ниәт менән ошо фотоны гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итеп, үҙем белгәндәренең исем-шәрифтәрен яҙып сығыуҙы кәрәкле таптым. Иҫләгәндәрем һәм аҙаҡ белешеүҙәрем буйынса был фотолағы 9 ҡыҙ Ленин исемендәге Мәскәү педагогия институтында уҡыныулар: Фәниә Мырҙаҡаева (1-се интернат-мәктәпте тамамлаған, Мәләүез районы), Гөлшат Йәнһөйәро-

УЙЛЫҒА - УЙ

# УРЫН КЕШЕНЕ БИҘӘЙМЕ?

**(Башы 2-се биттә).**

...Сәркәтип ҡыҙҙың "он занят", тигән һүҙенә лә иғтибар итмәй, "Минең дуҫым ул", тип, ике ҡатлы ишекте асып, кабинетҡа килеп индем. Оҙон өҫтәлдең арғы башындағы үҙенең урынында танышым телефон аша кем менәндер һөйләшә ине. Беҙҙең яҡтың теле менән әйткәндә, инде бер аҙ "ҡаҙыланған", йәғни, йыуантаҡлана төшкән, тауышы ла ярайһы ҡалынайған һымаҡ. Мине күргәс тә, буш ҡулы менән ишаралап, ишек төбөндәге ултырғысҡа күрһәтте, йәнәһе, "ултырып тор". Начальник кешенең ваҡыты, ғәҙәттә, бик тығыҙ булыуын үҙем дә белеп торам. Шуға бер аҙ уңайһыҙлыҡ та тойоп алдым. Уның һөйләшеп бөтөүен түҙемлек менән көтә башланым. Биш-ун минуттан, ахырҙа, һөйләшеп бөтөп, телефоны трубкаһын һалды. Инде минә иғтибар итер, тип, урынымдан торорға уҡталыуыма, ул етди йөҙ менән тағы ҡайҙалыр шылтыратып алды һәм минә "Ни йомош?" тигән һымағыраҡ баҡты. "Подполковник погондары тағылған хәрби кейемдә булғас, мине танымаһа, ахыры", - тип уйланым. Урынымдан тороп, уның өҫтәле янына килеп, үҙем башлап ҡул бирептүрешергә баҙнат иттем. Әлбиттә, танымауы ла бик мөмкин, егерме биш йылға яҡын ваҡыт үтеп киткән бит! Өҫтәүенә, минең һымаҡ "военный"ҙар ҡалала әҙме?.. Күрешкәс, ул оҙон өҫтәл артындағы ултырғысҡа ултырырға ишараланы. "Хәлдәр нисек?" тим, әлеккеләй, уның менән һүҙәребеҙҙең берегеп китеүенә һис тә икеләнмәйенсә. "Һәйбәт кенә әле, үҙең ни хәлдә? Ҡайҙарҙа юғалып йөрөнөң? Нишләп бер ҙә күренмәнең?" - тип ул минең менән һөйләшә башлағындыр, тип уйлаһағыҙ, әлбиттә, хаталанаһығыҙ! "Һеҙ - Фәлән Фәләновичтың туғаны бит әле, - тип "һеҙ"ҙән башлап алып китте был, - ниндәй йомош алып килде бында?.." Мин, урыҫтар әйтмешләй, "на всякий случай" әҙерләп килгән бер бәләкәй генә һорауымды бирҙем. "Ярай, ҡарарбыҙ. Если что, результатын Фәлән Фәләнович (яҡын-тирәлә күптәргә билдәле булған яҡын туғанымдың исеме) аша хәбәр итермен..." "Рәхмәт, һау булып торороҙ", - тиеүҙән башҡа һүҙ таба алманым. Үҙем дә инде уның менән хәҙер арабыҙҙағы "дистанция"ны тотоп, тик "һеҙ"гә генә һөйләшергә кәрәк икәнлекте аңланым. Шул саҡ танышымдың булмә стенаһындағы сөйҙә сабата эленеп тороуын күҙ алдына килтерергә тырышып, эстән генә йылмайып ҡуйҙым...

Башҡаса, әлбиттә, уға һис бер ниндәй үтенес менән дә барырға тура килмәне, әлеге һорауымды ла унһыҙ ғына, хатта бик еңел хәл иттем. Бөтөнләйгә таныш булмаған, әммә хәрби кешене хөрмәт иткән яҡташтарым да табылды... Һирәкһаяҡ осрашырға тура килһә, әлеге танышым менән "Һаумыһығыҙ", тип кенә күрешеп үтеп китәм. "Ҙур" кеше бит, сүтики.

Бындай миҫалдар менән һәр кем таныштыр, моғайын. Улар хаҡында бәйән итә башлаһаң, кәйеф төшә. Шуға ла әлеге һүҙбашымдың "урын кешене биҙәмәй", тигән өлөшөн һөйләгәс, "кеше урынды

ва (Темәстә эшләне), Р. Мәсәлимова (Учалы ҡыҙы, Сибайҙа эшләне, мәрхүмә), З. Сафиуллина (Салауат ҡалаһында эшләй ине), Минә Бүләкбаева (Әлшәй ҡыҙы, Стәрлетамаҡ балалар йортонан, әле лә Өфөлә эшләргә тейеш), Зарифа Туҡабаева (Стәрлетамаҡта эшләне, әле мәрхүмә), Фәрзәнә Сабитова (Борай ҡыҙы), Рәйсә Шәрәфетдинова (Спартак Ильясовтың ҡатыны), Фәнүзә Атанбаева (1-се интернат-мәктәпте тамамлаған, Стәрлелә эшләне). Хәҙер ҡалғандары тураһында: Клара Биишева (Баймаҡ ҡыҙы, ҡайҙалыр балалар йортонда үҫкән, 70-се йылдарҙа Өфөлә Офицерҙар йортонда эшләгәйне), Ивний Шафиҡов (әлеге БР мәҙәниәт министры Ә. Шафиҡованың атаһы), Шәрифә Мырҙабаева (1-се интернат-мәктәпте тамамлаған, Аҙыҡ-түлек институтында уҡыны, Стәрлетамаҡта эшләй ине), Рәфисә Ханнанова (1-се интернат-мәктәпте тамамлаған, Аҙыҡ-түлек институты, шағирә Зөлфиә Ханнанованың апаһы), Резеда Әхмәҙиева (Учалы ҡыҙы, ире Руслан менән Өфөлә йәшәйҙәр ине, Луиза Фархшатованың апаһы), Марс Вәлиев (Мәскәүҙә аспирантурала уҡыны, аҙаҡ БДУ-ның география факультетында уҡытты), Барый Ноғоманов (БДУ-ла биология факультетында эшләне), Фәрит Ильясов (Тимирязев ис. Ауыл хужалығы академияһын бөтөрҙө, булһа кәрәк, Учалынан ине, мәрхүм), Р. Камалов менән ҡатыны З. Камалова (Әбйәлил ҡыҙы, Федоровкала йәшәйҙәр ине), Хәлил Барлыбаев (Баймаҡ районы Йомаш ауылынан, 1967 йыл яҙ Венгрияла хеҙмәт итеп ҡайтып килгәндә Мәскәүҙә МДУ-ла миңә туҡталып китте. Йәй буйы мин уны математиканан әҙерләнем. Шул йылды ул МДУ-ның иҡтисад факультетына уҡырға инде. Иҡтисад һәм философия фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһында эшләй - уның хаҡында уҡыусыларыбыҙ яҡшы белә торғандыр, моғайын), артабан фотола - хәҙер инде үҙ фән өлкәләрендә докторҙар, профессорҙар Шамил Усманов, Тимерғәле Килмөхәмәтов һәм мин, ошо юлдарҙың авторы. Ҡалған 6 кеше хаҡында бер ни ҙә әйтә алмайым. Күрәһең, һөнәрҙәре буйынса Мәскәүгә белемдәрен камиллаштырыу курсына килгән яҡташтарҙыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәжит Мәхмүт улының сығышы гәзитебеҙҙә тағы бер яңы рубрика асыуға сәбәп булды. Ғаиләгеҙҙә һаҡланған иҫке фотоһүрәттәр тарихы тураһында һөйләгеҙ, әйҙә, гәзитебеҙ биттәре аша, тип мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларға. Тик ул фотоһүрәттәр һөйләгән тарих республикабыҙ, халҡыбыҙ өсөн әһәмиәтле булһын, тип тә иҫкәртәбеҙ. Мәҫәлән, Мәжит Мәхмүт улы тәҡдим иткән фотоға ҡарап, бөгөн үтә лә мөһим булған бер фекерҙе ҡеүәтләйһең: балалар мәктәптә ниндәй генә телдә уҡымаһын, башында белеме, күңелендә маҡсатынтылышы бар икән, ул теләгән бер юғары уҡыу йортон яулай ала!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**




биҙәй" икәнлеге хаҡында ла бер-ике һүҙ әйтке килә. Тормошта һәр саҡ кемгәлер зарланып ҡына йөрөү ҙә килешмәгән нәмә бит. Һүҙ, әлбиттә, әлегеләй юғары урындарҙы биләгән кешеләр хаҡында бара. Ошо хаҡта фекерләү өсөн ниндәйҙер вазифа башҡарыусы шәхескә ике төрлө күҙлектән сығып баһа биреү мөһим: берәүһе теге йәки был кешенең профессиональ яғын күҙ уңында тотһа, икенсеһе, әлбиттә, уның башҡаларға ҡарата мөнәсәбәте. Үҙ һөнәре буйынса маһир кеше булып та, һәр кешелә булырға тейешле ябай ғына әхлаҡи сифаттары булмай икән, бындай шәхесте лә урын биҙәүсе тип атап булмайҙыр, минеңсә, һәм улар башта иҫкә алып киткән "ағай" категорияһына инә.

Кешеләр менән эшләй торған "урындағылар" айырыуса һәр тарафтан яҡшы булып ҡалырға тейеш. Бөтә начальниктар ҙа танауҙарын күккә сөйөп, "сабаталарын түргә" элә икән, тип әйтеү ғәҙел булмаҫ. Ҙур дәрәжәләргә барып етеүҙәренә ҡарамаҫтан, кешеләр менән әҙәмсә һөйләшергә онотмаған хужалар ҙа бар. Хеҙмәт срогы дауамында ифрат та ябай, яғымлы мөнәсәбәттә булған, миңә һәр саҡ "доктор" тип кенә мөрәжәғәт иткән начальниктар булманы түгел. Кудрин фамилиялы бер генералды әле булһа бик ихтирам итеп иҫкә алам (уның ҡыҙына операция яһарға тура килгәйне). Бүлмәгә әҙәпле генә итеп ишек шаҡып килеп инеп, кешеләрсә иҫәнләшеп, ҡайсаҡ үҙенең һаулыҡ проблемалары менән бүлешер ине. Һуңыраҡ та, уға ниндәй генә һорау менән мөрәжәғәт итеүгә ҡарамай, һәр саҡ тейешенсә иғтибарын бүлеп, мәсьәләне шунда уҡ хәл итә торғайны. Рәсми ҡабул итеү ваҡытынан тыш инһәм дә миңә бер нисә минут таба, ябай ғына итеп һөйләшә лә ине был генерал.

Хәрби хеҙмәтемде тамамлап ҡайтҡас, медицина университетының отоларингология кафедраһы бүлеге мөдире профессор Арефьева менән дә бер нисә тапҡыр осрашырға тура килде. Башҡортостандың баш отоларингологы вазифаһын да башҡарған был апайҙың яғымлылығына һушым китте. Эше күп булыуға ла ҡарамаҫтан, миңә оҙаҡ ҡына ваҡытын сарыф итеүҙе үҙен "түбәнһетеү" тип һанаманы...

Һаулығым буйынса эшкә ярамағанымды яҡшы белеүҙәренә ҡарамаҫтан, миңә ҡала дауаханаһындағы үҙҙәре етәкләгән бүлектәрендә табип эше тәҡдим итеүсе ихлас, алсаҡ йөҙлө күп кенә бәғзе коллегаларыма тик ихтирамым ғына арта. Бындай кешеләргә министр портфелен биргән хәлдә лә, минең инаныуымса, улар ғүмер буйы үҙ асылында, йәғни, ябай кеше булып ҡаласаҡ. Бына шундай кешеләр хаҡында иң яҡшы иҫтәлектәр генә һаҡлана.

Кешеләр барыһы ла ололарға ҡарата ихтирамлы, ә кеселәргә - иғтибарлы булыу тойғоһонда иң беренсе нәүбәттә атаәсәһе тарафынан, бала сағынан уҡ тәрбиәләнергә тейештәр. "Ана һөтө менән инмәгән - тана һөтө менән инмәҫ", тигән боронғолар. Элегерәк өлкәндәр балаларына "бүтәгәнән түбән бул", тип аҡыл өйрәтә ине. Быны, әлбиттә, "кеселекле бул", тип аңлау ҡатмарлы түгел. Барыбыҙға ла иң беренсе үрнәк булып тороусы - Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһү ғәләйһи үәс-сәләм хаҡында беләйек. Үҙе ниндәй генә кәйефтә булыуына ҡарамаҫтан, кешеләргә һәр саҡ алсаҡ, мөләйем һәм иғтибарлы булған ул, шуның менән үҙенең өммәтендә барлыҡ мосолмандарға ла өлгө булып ҡала. Иман килтергән һәр кешелә булырға тейешле етмештән ашыу ана шундай иң яҡшы сифаттар хаҡында бихисап хәҙистәрендә әйтеп ҡалдырған Аллаһ илсеһе. Ниндәй генә урын биләүебеҙгә ҡарамаҫтан, "кеше" тигән асылыбыҙ һаҡланып ҡалһа, шунда ғына беҙ әлеге әйткәндәй "урынды биҙәүсе" була алырбыҙ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

**Яҙыусы, журналист, этнограф һәм археолог Филипп Диомидович НЕФЕДОВ (1838-1902) Владимир (хәҙерге Владимир өлкәһе Собинов районы) губернаһында донъяға килгән. 1882-1884 йылдарҙа Көньяҡ Урал буйлап сәфәр ҡыла, тау заводы эшселәренең, урыҫ күскенселәренең, башҡорттарҙың, мари һәм мишәрҙәрҙең тормош-көнкүрешен яҙып ала. Башҡортостандағы 800-гә яҡын ҡурғанды тикшереп, уларҙы картаға төшөрә. Бик күп башҡорт әкиәттәре, риүәйәттәре, эпостарын һәм башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып ала. Башҡорттар тураһында тарихи һәм этнографик очерктар авторы. Урыҫ әҙәбиәтендә беренсе булып Салауат Юлаевты халыҡ батыры тип атай. "Пугачев бунты алдынан башҡорттар араһындағы хәрәкәт. Халыҡ батыры Салауат" тип аталған очерктан өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

Салауат - тарихи шәхес, уның исеме Пугачев күтәрелеше сәбәпле болғаныш осоро менән бәйле. Пушкин үҙенең "Пугачев бунты тарихы"нда "ажарлы" башҡорт Салауат һәм уның атаһы Юлай хаҡында бәйән итә; яңы быуат урыҫ тарихын өйрәнеүселәр ҙә Салауатты телгә ала; тарихи журналдар ҙа әленән-әле уның хаҡында яҙып тора, бөгөнгө романистар иғтибарынан да уның төшөп ҡалғаны юҡ. Был хаҡта байтаҡ мәғлүмәт бар кеүек тойолһа ла, башҡорт батырының шәхесе асылмай ҡала килә, ул нигеҙҙә тыштан, йәғни боласы, баш күтәреүсе тип кенә һүрәтләнә, ә бына уның "ажарлы" эшмәкәрлегенең сәбәптәре ниҙә; кеше булараҡ кем ул Салауат - был хаҡта белмәйбеҙ һәм беҙгә фаразлауҙар менән генә сикләнергә тура килә. Рәсми сығанаҡтарҙан алынған яңы мәғлүмәттәр һәм риүәйәттәр, шулай уҡ башҡорттарҙың батыр хаҡындағы ауыҙ-тел ижады, йырҙары Салауат менән яҡынданыраҡ танышырға, уның күңеленә "күҙ һалырға" булышлыҡ итер.

Тәүҙә шулай ҙа Башҡортостандың үткәненә күҙ ташлайыҡ. Составына бөгөнгө Ырымбур, Өфө, Һамарҙың яртыһы, Вятка һәм Пермь губерналарының икешәр өйәҙе ингән икһеҙ-сикһеҙ край борон-борондан ошо ерҙә көн итеүсе халыҡ исеме менән аталып йөрөтөлә һәм ул халыҡ - башҡорттар - ырыу үҙенсәлектәре буйынса Урал-Алтай халыҡтары ғаиләһенә ҡарай...

**(Дауамы бар).**

*✓ Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен өйрәнеүгә булышлыҡ итеү маҡсатында туған телдәрҙе яҡлау буйынса Федераль үҙәк булдырыу ҙа күҙаллана. Ә был бары Федераль үҙәк ярҙамы менән генә тормошҡа ашырылырға мөмкин.*

# ЗАКОНДА КАНИКУЛДАР

## йәки Ашаған белмәй,

**Йылға туҡтауһыҙ ағыуын дауам итһә лә, яҙғы ташҡындар булып торһа ла, заманалар үтһә лә, асылда, һыу шул уҡ һыу булып ҡала. Йәғни тормоштоң үҙ ҡанундары. Бары тик үҙебеҙ генә тормошобоҙҙо шул йылғаға яраҡлаштырырға, көнитмешебеҙҙе яҡшыртырға тырышабыҙ, йылға менән мөнәсәбәтебеҙҙе көйләгән ҡағиҙәләр ҡабул итәбеҙ. Ҡағиҙәләр рәсми телдә закон тип атала. Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәбеҙҙе закондар хаҡында ғына ҡорорға тырышҡайныҡ, тормош хаҡында һөйләшеү килде лә сыҡты. Тимәк, закондарыбыҙ тормошобоҙҙан айырылғыһыҙ.**

**Зариф Закир улы, беҙҙең халыҡта шундай бер әйтем бар: ашаған белмәй, тураған белә. Ысынлап та, ашаған һәр бер кеше, дөйөм табаҡта минең дә өлөшөм бар, тип уйлай, ә тураған кеше тигеҙ итеп, барыһын да мәхрүм итмәҫкә тырыша. Һеҙ ана шул тураусы ролендә, йәғни Дәүләт Думаһында закон сығарыусы, граждандарҙың мәнфәғәтен, хоҡуҡтарын яҡлаусы, бурыстары барлығын иҫтәренә төшөрөүсе. Шул уҡ ваҡытта һеҙ беҙ белмәгән күп кенә проблемаларҙы барлыҡ нескәлектәренә тиклем аңлайһығыҙ. Асылда, һеҙ бер үк нәмәне - дәүләт бюджетын - турайһығыҙ. Ашаған кеше һәр ваҡыт, миңә күберәк бирергә тейештәр, тип уйлай, әммә ундай мөмкинлек юҡ. Барлыҡ ҡапма-ҡаршылыҡтар шул юҫыҡта килеп сыға. Ошо хәлегеҙгә ниндәй аңлатма бирәһегеҙ?**

- Әлбиттә, бер ваҡытта ла депутат булырмын тип уйламағайным. Әммә был вазифаны йөкмәгәс-йөкмәгәс, ысынлап та, дәүләт бюджетының граждандарҙың мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүенә булышлыҡ итеүсегә, шуның буйынса закондар сығарыусыға әйләнергә тура килде. Халыҡ менән тәүге осрашыуҙарҙа уҡ уларҙың теләктәрен, проблемаларын яҙып барҙтороуы, шуға ла уларҙың проблемаларын нығыраҡ аңлауы тураһында һөйләүсе күрһәткес.

**Һеҙ халыҡ менән осрашыуҙарға күп йөрөйһөгөҙ. Ауылдарҙа, ҡалаларҙа булғанда бигерәк тә ниндәй проблемалар менән йышыраҡ осрашырға тура килә?**

- Ярты йыл һайын һәр бер район һәм ҡалала йөрөп, һайлаусылар менән осрашам. Улар алдында отчет яһайым. Һорауҙарға яуап бирәм. Күп кенә һайлаусыларҙың финанс яғынан наҙанлығы хаҡында әйтеп үтергә теләйем. Ябай халыҡ аңынтоңон белмәйенсә, микрофинанс ойошмаларынан аҡса ала. Мәҫәлән, 5-10 мең һум алғандар һуңынан 100 мең һум түләүле булып ҡала. Аҡса алыусылар килешеүҙәге ваҡ хәрефтәр менән яҙылған шарттарҙы уҡый һалып бармай. Әле беҙ Дәүләт Думаһында беренсе уҡыуҙа ҡараған законда бындай ойошмаларҙың проценттарын сикләү тураһында һүҙ алып барабыҙ. Әйтәйек, аҡсаға мохтажлығы булған кеше 10 мең һум алды икән, ваҡытында түләй алмаған осраҡта ла бурыс суммаһы пеня-проценттары менән 15 мең һумдан күп булырға тейеш түгел. Әлбиттә, бындай осраҡта кешенең үҙ аҡылы булһын ул, инереңдән алда сығырыңды уйла, тиҙәр бит.

Бер нисә ай элек миңә Бөрйән районының Байназар ауылынан хат килде. Унда участка дауаханаһын ябырға йөрөүҙәре хаҡында әйтелгәйне. Барҙым, тәүҙә район хакимиәт башлығы менән һөйләштем, ул хатта яҙылған мәғлүмәттең дөрөҫ түгеллеге хаҡында белдерҙе. Ауылға барып, участка дауаханаһы табиптары, халыҡ менән осрашып һөйләштек. Барыһы ла аңлашылды. Участка дауаханаларын ябалар, тигән хәбәр ауыл халҡында ҙур борсолоу тыуҙырған булып сыҡты. Халыҡты тынысландырҙыҡ. Уларға тағы ла шуны аңлатырға тура килде: яңыраҡ ҡабул ителгән законға ярашлы, участка дауаханаһын, медицина учреждениеһын халыҡтың теләгенән тыш яба алмайҙар.

Тағы бер мәсьәлә. Башҡортостан Республикаһы Башлығы указына ярашлы, әгәр ҙә ғаилә фатирға мохтаж икән, тәүге бала тыуғандан һуң уларға 300 мең һум аҡса түләнә. Миңә Сибай, Әбйәлил, Баймаҡ яғынан йәш ғаиләләр мөрәжәғәт итте. Баҡтиһәң, шул төбәктә йәшәүселәрҙең балалары Магнитогорск ҡалаһының бала табыу йортонда тыуһа, был аҡса түләнмәй. Сөнки тәүге положениеға ярашлы, бала мотлаҡ республикала тыуырға тейеш ине. Күптән түгел был положениеға үҙгәрештәр индерелде, йәғни ата-әсәһе республикала йәшәһә, балаһы ҡайҙа тыуыуға ҡарамаҫтан, уларға ошо сумма түләнәсәк. Икенсенән, был аҡса биреләүе хаҡындағы танытма алты айҙан ғәмәлдән сыға ине. Был ваҡыт эсендә ғаиләнең йорт төҙөргә йәки йорт һатып алырға өлгөрмәүен иҫәпкә алып, срок туғыҙ айға тиклем оҙайтылды. Өҫтәүенә, кире ҡайтарылған йә дөрөҫ тултырылмаған документтарҙы яңынан тапшырыу срогы 1 сентябргә тиклем оҙайтылды. Бөгөнгә ике меңдән ашыу ғаилә танытма алып өлгөргән. Рәсәйҙә бындай суммалағы ошондай түләү бер ерҙә лә юҡ.

**Һеҙ иғтибар иткәнһегеҙҙер, быйыл йәй Өфө урамында, башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә, ауырлы ҡатындарҙы йыш осратырға була. Был күренеште льготалы ипотека хаҡындағы закондың барлыҡҡа килеүе менән дә бәйләргә мөмкин бит. Шулаймы?**

- Әлбиттә. Ошо көндәрҙә "Юлдаш" радиоһы, телевидение аша ошо закон буйынса сығыш яһағайным. Закон ҙур резонанс тыуҙырҙы, бик күп кешеләр шылтыратты. Законға килгәндә, үткән йылдың декабрендә РФ Хөкүмәтенең ҡарары нигеҙендә 2 һәм 3 балалы ғаиләләргә 6 процентлы ташламалы ипотека бирелә. Быының өсөн бюджеттан 600 миллиард һум аҡса бүленә. 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған балаларға ғына ҡарала бындай ташлама. Алда төҙөлгән килешеүҙәр үҙгәртелмәй. Бындай ярҙам беҙҙең илдә бер ҡасан да булмаған. Был закон буйынса ташламалы ипотека икенсе бала тыуғас, өс йылға тиклем бирелә лә, өсөнсө бала тыуғас, тағы ла биш йылға оҙайтыла. Дөйөм алғанда һигеҙ йыл килеп сыға.

**"Енәйәти эҙәрлекләнеүҙәрҙән граждандарҙы яҡлау тураһында"ғы закон буйынса ла аңлатма биреп үтһәгеҙ ине?**

- Элек бер кешегә енәйәт эше асылып, күпмелер ваҡыттан һуң уны туҡтатһалар, ике-өс йыл үткәндән һуң йәнә енәйәт эшен кире асалар ине. Шул сәбәптән кеше ҡурҡып йәшәне. Шундай хәлдәр булмаһын өсөн беҙ прокурорҙарға һәм тәфтишселәргә енәйәт эшен бер йыл эсендә генә киренән асыу мөмкинлеген ҡалдырҙыҡ. Айырыуса осраҡ булған хәлдә енәйәт эшен асыуҙы суд ҡына хәл итә ала.

**Автомобиль ҡараҡтарына ҡарата ла законға үҙгәрештәр индергәнһегеҙ икән…**

- Элек автомобилде ҡыуып алып киткән кеше тотолған хәлдә лә, килтерелгән зыян өсөн (бер ергә бәрелһә, йәки автомобилде ташлап китеп, кемдер запчастарын тиреп алһа) түләтеп булманы. Һөҙөмтәлә автомобиль хужаһы зыян хаҡын ала алмай ине. Ул законға үҙгәрештәр индерҙек. Уның буйынса, автомобилде ҡыуып алып китеүсе килтерелгән зыян өсөн түләргә бурыслы.

**Туған телдәрҙе уҡытыу тураһындағы закон ҙур резонанс тыуҙырҙы. Был законға мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Белеүегеҙсә, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына (ФГОС) илебеҙ субъекттарының дәүләт телдәрен уҡытыу индерелмәгәйне. Закон проекты Дәүләт Думаһына тәҡдим ителгәс, Башҡортостанда эшсе төркөм булдырылды, уның составына Дәүләт Думаһы депутаттарынан Зөһрә Рәхмәтуллина менән икебеҙ индек. Беҙ республика исеменән тәҡдимдәр әҙерләнек. Беренсенән, субъекттарҙың дәүләт телдәрен уҡытыу Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына индерелергә тейеш. Икенсенән, туған телде һәм республиканың дәүләт телдәрен өйрәнеүгә ғариза йыл һайын түгел, ә ике тапҡыр - бала беренсе һәм бишенсе синыфҡа барғанда ғына яҙылырға тейеш. Был уҡытыу эштәрен алдан планлаштырыу йәһәтенән уңайлы, ата-әсәләрҙе лә йыш борсомаясаҡтар. Өсөнсөнән, уҡытыу методикаһын камиллаштырыу, уҡытыусылар әҙерләү, туған телдә әсбаптар сығарыу һәм уларҙы лицензиялау өсөн милли телдәрҙе өйрәнеү концепцияһы булдырыу. Бынан тыш, Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен өйрәнеүгә булышлыҡ итеү маҡсатында туған телдәрҙе яҡлау буйынса Федераль үҙәк булдырыу ҙа күҙаллана. Ә был бары Федераль үҙәк ярҙамы менән генә тормошҡа ашырылырға мөмкин. Ошо пункттар буйынса принципиаль ризалыҡ алғас, Дәүләт Думаһындағы Башҡортостан депутаттары әлеге закон проекты өсөн ыңғай тауыш бирҙе. Мин шәхси рәүештә тағы ла гимназияларҙы һаҡлап ҡалыу буйынса тәҡдим индергәйнем. Был мәсьәләгә килгәндә, уларҙың эшмәкәрлеге әле булған закондарҙа ҡаралған һәм быға бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ. Шуға күрә ҡабат был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтманыҡ.

Социаль селтәрҙә бер етәксе урында эшләгән кеше "Байғусҡаров туған телдәрҙе уҡытыуға ҡаршы", тип яҙып сыҡты. Был дөрөҫ хәбәр түгел. Мин мәктәптә химия, физика, биология фәндәрен башҡортса уҡыным, әммә үҙемде кешенән кәм тип һанаманым. Әрмегә кит-



ым. Шуларҙың яртыһынан күберәген, ҡайһыларын закон рәүешендә, ҡайһыларын булған закондарға төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индереү юлы менән, тормошҡа ашырҙым. Һәр хәлдә, һәр районда, ауылда бирелгән наказдар буйынса яуап тота алам. Нисек кенә булмаһын, мин үҙемде һаман да ауыл кешеһе итеп тоям. Шуға ла ауылдың, ғөмүмән, кешеләрҙең проблемалары миңә яҡшыраҡ аңлашыла, улар миңә яҡыныраҡ һәм был халәтем депутат эшмәкәрлегемдә лә ярҙам итә. Оҙаҡ йылдар Өфөлә судъя, ябай суд приставы, һуңынан шул хеҙмәттә етәксе булып эшләүем кешеләрҙең тормош проблемаларын ныҡлап аңларға ярҙам итә.

**Кесе өйгә нимә кәрәк булһа, оло өйгә лә шул кәрәк, тиҙәр. Беҙҙең республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы тәҡдим иткән ҡарарҙар Дәүләт Думаһы кимәлендә ҡабул ителгәне бармы?**

- Дәүләт Думаһы фекеренсә, беҙҙең Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай иң әүҙем эшләгән төбәк парламенты иҫәпләнә. Мәҫәлән, транспорт һалымын түләүҙән баш тартыусыларҙың водитель таныҡлығын ҡулланыуын сикләүгә бәйле законды беҙҙең парламент тәҡдим итте. Ул законды урын-еренә еткереп ҡабул итергә генә ҡалды. Беҙҙең республика тәҡдим иткән тағы бер закон туберкулез менән ауырыған кешеләрҙе башҡаларҙан айырып дауалау тураһында. Был законды ҡабул иттек. Әгәр ҙә хеҙмәткәргә эш хаҡы түләнмәһә, ул эшләгән ойошманы, учреждениены тикшереү өсөн хоҡуҡ биреләү мәсьәләһен дә беҙҙең республика депутаттары күтәреп сыҡты. Һанай китһәң, бик күп закондар Башҡортостан инициативаһы менән тормошҡа ашты. Был, әлбиттә, беҙҙең депутаттарҙың халыҡҡа яҡыныраҡ

**✓ *Беҙҙең Рәсәй әлеге ваҡытта иң йәш пенсионерҙар иле булып һанала. Шул уҡ ваҡытта беҙ ауыл ерендә эшләп, хаҡлы ялға сығыусыларҙың пенсияһын 25 процентҡа арттырыу тураһында Рәсәй Хөкүмәтенә тәҡдим индерҙек.***

# БУЛМАЙ...

## тураған белә

кәндә русса йүнләп белмәһәм дә, взвод командиры урынбаҫарына тиклем үрләнем, рус телен дә өйрәндем. Барыһы ла кешенең үҙенән тора. Ғаиләбеҙҙә туған телебеҙҙә генә аралашабыҙ. Ҡыҙым Гәлсәр бәләкәй сағында миңә русса өндәшһә, мин һине аңламайым, башҡортса әйт, ти торғайным. Бер мәл ҡыҙым: "Атай, һин русса беләһең бит, мин телефондан һөйләшкәнеңде ишеттем", - тип әйтеп һалмаһынмы.

Туған телдәрҙе өйрәнгән өсөн аттестатҡа өҫтәмә балл ҡуйырға кәрәк, тигән тәҡдим бар. Һәр хәлдә, Рәсәй Мәғариф министрлығы был тәҡдимгә ҡаршы сығыш яһаманы. Яңыраҡ ҡына Дәүләт Думаһының милләттәр мәсьәләһе буйынса комитет етәксеһе Илдар Ирек улы Ғилметдинов менән һөйләштем, көҙгә был мәсьәләгә кире әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ.

**Ағымдағы йылда шулай уҡ ҙур резонанс тыуҙырған мәсьәлә - пенсия реформаһы. Бер кемгә лә сер түгел: иҡтисадты үҫтереп, етештереүсе предприятиелар төҙөп, күп эш урындары булдырып, ошоларҙан йыйылған һалым, пенсия фондына аҡса күсереүҙәр ярҙамында хәл ителергә тейешле ошо мәсьәләне анһат юл менән хәл итергә ынтылыу ҙа бар бында. Халыҡта был осраҡта "Итәк ҡырҡып ең ямау" тип әйтәләр. Белгестәр иҫәпләүенсә, әлеге реформа пенсия фондына бәйле проблеманы ваҡытлыса ғына хәл итәсәк, сөнки 5-6 йылдан һуң был мәсьәлә тағы ла килеп тыуасаҡ, ти. Ул сағында беҙгә пенсияға сығыу йәшен тағы ла арттырырға тура килмәҫме?**

- Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ пенсия реформаһы мәсьәләһен бер нисек тә урап үтә алмайбыҙ. Инерция буйынса тағы ла бер нисә йыл ғына шулай барасаҡ та, һуңынан пенсия түләү бер нисек тә мөмкин булмаясаҡ. Был мәсьәләне шундай хәл менән дә сағыштырырға мөмкиндер. Әйтәйек, ауыр сиргә дусар булған кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалыр өсөн дарыу, укол ғына етмәй, уға мотлаҡ рәүештә операция яһарға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр әйтеүенсә, йәнәһе, халыҡтың 40 проценты пенсия йәшенә етмәйәсәк. 1927 йылда ғүмер оҙайлығы уртаса алғанда 42-43 йыл, 2000 йылда 65 йыл да 3 ай, шул иҫәптән ирҙәрҙеке 59 йыл булған. Әгәр ҙә ул саҡта ирҙәрҙең 60 йәштә пенсияға сығыуын иҫәпкә алһаҡ, бер ир ҙә пенсияға сыға алмаған, тигән һүҙ. Әммә улай булмаған бит. Бөгөн уртаса ғүмер оҙайлығы 73,5 йыл тирәһе. Әлбиттә, кемдер пенсияға тиклем йәшәй алмауы ла бар. Ғалимдар иҫәпләүенсә, кешенең ғүмер оҙайлығы 20 процентҡа гендарҙан, ҡалған 80 проценты үҙенән тора.

Мин ни өсөн был реформа өсөн тауыш бирҙем һуң? Беренсенән, хәҙер түләнгән пенсиялар, ысынлап та, бик аҙ. Шуға күрә лә пенсияға сығыусыларҙың яртыһы һаман да эшләүен дауам итә. Дөрөҫөн әйткәндә, 10-12 мең һум аҡсаға кеше барыбер ҙә йәшәй алмай. Тағы ла бер мәсьәлә: пенсияға сығыр алдынан да кешегә эш кәрәк буласаҡ. Әгәр ҙә эш таба алмаһа? Бөгөн республикала эшһеҙлек буйынса пособие айына 4900 һумға тиклем тәшкил итә. Был бик аҙ. Шуның өсөн беҙ федераль ҡаҙнанан кешегә күберәк пособие түләнһен өсөн өҫтәмә аҡса бүлеүҙе һораныҡ һәм Рәсәй Хөкүмәте менән килештек. Пособие йәшәрлек булырға тейеш.

Хәҙерге ваҡытта 1 пенсионерға 1,8 эшләүсе кеше тура килә, ә элек 4,5 эшләүсе кешегә 1 пенсионер ине. Ә инде рәсми теркәлгән эшләүселәрҙе алып ҡарағанда, 1 пенсионерға 1,2 эшләүсе килеп сыға. Дөйөм халыҡтың 37 проценты пенсионерҙар булған хәл бер илдә лә юҡ. Әлеге ваҡытта пенсия фондының аҡсаһы йылына 8 триллион тирәһе тәшкил итә. Шуның 3,5 триллион һум тирәһе дәүләт ҡаҙнаһынан бирелә. Бөтә илдәрҙә лә пенсия фонды үҙаллы йәшәй, тик беҙҙең илдә генә пенсионерҙарға дәүләт ҡаҙнаһы ярҙам итә. Сөнки эшләүселәрҙең эш хаҡынан күсерелгән аҡса пенсионерҙарға түләргә етмәй. Беҙ илебеҙ бюджетының 20 процентын пенсия фондына күсереп торабыҙ. 2024 йылда уртаса ғүмер оҙайлығы - 78, 2030 йылда 80 йыл буласаҡ. Ул саҡта беҙҙә пенсияға сығыу ваҡыты донъя стандартына яҡынса тиң буласаҡ. Беҙҙең Рәсәй әлеге ваҡытта иң йәш пенсионерҙар иле булып һанала. Шул уҡ ваҡытта беҙ ауыл ерендә эшләп, хаҡлы ялға сығыусыларҙың пенсияһын 25 процентҡа арттырыу тураһында Рәсәй Хөкүмәтенә тәҡдим индерҙек.

**Алкоголь эсемлектәрҙе һатыуҙы сикләүгә бәйле закон да ҡабул ителде. Был хаҡта нимәләр әйтерһегеҙ?**

- Эскелек ирҙәрҙең ғүмерен - 20, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғүмерен 17 йылға кәметә икән. Әгәр ҙә был зәхмәтте еңеп сыға алһаҡ, халыҡтың ғүмер оҙайлығы ла артасаҡ. Беҙҙең медицинаға киткән сығымдарҙың 25 проценты эскелектең һөҙөмтәһен дауалау өсөн китә. 25 процент - йөҙәр миллиард һум ул. Шуға күрә бер коллегам менән көҙгөләккә закон әҙерләп ятабыҙ. Әлбиттә, был законға ҡаршылар күп. Закон кешене эскелектән мәжбүри рәүештә дауалау тураһында. Әгәр ҙә кеше үҙе риза булмаһа, бөгөнгө закондар буйынса уны мәжбүри дауалап булмай. Минең ҡарамаҡҡа, кеше алкоголизм менән ауырый икән, эскән килеш енәйәт ҡыла икән, тимәк, уны мәжбүри дауаларға кәрәк. Белгестәр, һеҙ бөтә кешене лә дауалай алмаясаҡһығыҙ, улар барыбер ысҡынасаҡ, тиҙәр беҙгә. 500 мең кешене дауалаған хәлдә лә, шуларҙың 250 меңе үҙ ғаиләһенә ҡайтып, айыҡ тормош менән йәшәй башлаһа, файҙаға ғына буласаҡ. Бының менән беҙ күпме ғаиләне һаҡлап алып ҡаласаҡбыҙ.

**Эйе, депутат булараҡ замана сиренә - эскелеккә ҡаршы әүҙем көрәшәһегеҙ. Һеҙ - йәмғиәтте айыҡтырырға ярҙам иткән закондар авторы ла.**

- Һайлау алды кампанияһы барышында халыҡ эскелеккә йыш зарланды һәм закондар кимәлендә саралар күреүемде һорағайны. Шуға ла сәйәси эшмәкәрлегемдә заман афәтенә ҡаршы көрәш ҙур урынды ала. Контрафакт араҡы, көмөшкә һатыуға ҡаршы закон өҫтөндә эшләнем һәм ул ҡабул ителде. Элек спиртлы эсемлек һатҡан өсөн 1,5 мең һум ғына штраф түләйҙәр ине, ә хәҙер 30 мең һумдан кәм түгел. Тағы ла, бер йыл эсендә икенсе мәртәбәгә законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлектәр һатҡан кешегә енәйәт эше ҡуҙғатыла.

**Дәүләт Думаһы өҫтәмә килем өсөн һалымды 20 процентҡа тиклем арттырыу тураһында закон ҡабул итеп, Хөкүмәткә тапшырҙы. Әммә был закон "күләгәләге иҡтисадты" тағы ла үҫтермәҫме, йәғни килемде йәшереү, конверт менән эш хаҡтарын таратыу күбәймәҫме?**

- Һорау урынлы. Быйыл көҙ страховка взносы түләмәгән кешеләр тураһында закон ҡараясаҡбыҙ. Беҙҙә барлығы 82 миллион кеше хеҙмәткә яраҡлы иҫәпләнә, шуларҙың 53 миллионы ғына рәсми рәүештә эшләй. Ҡалған 30 миллион тирәһе һалым да, взнос та түләмәй, пенсия фондына аҡса ла күсермәй. Улар төҙөләштә йә булмаһа кемгәлер ялланып эшләй. Әммә уларҙың балалары мәктәптә уҡый, улар юлдан йөрөй, ауырып китһәләр, дауаханаға баралар. Яңы закон буйынса ундайҙар дәүләткә түләргә бурыслы. Хәтерем яңылышмаһа, беҙҙең республика ҡаҙнаһынан йыл һайын 19 миллиард һум тирәһе шундайҙарҙың страховкаһы өсөн түләнә. Ә ул аҡсаға күпме балалар баҡсаһы, мәктәп төҙөргә була. Бындай хәл менән килешеп буламы? Әйтәйек, минең өҙлөкһөҙ стажым 38 йыл тәшкил итә. Эшләмәгән бер көнөм дә булманы. Барлыҡ түләүҙәрҙе түләп барам һәм бының менән кемделер аҫрайым булып сыға. Әлбиттә, был ғәриптәргә ҡағылмай. Әгәр ҙә кемдер ҡайҙалыр эшләй, конвертта эш хаҡы ала икән, ул бит түләргә лә тейеш. Тағы ла оло кешеләр хеҙмәт урыны мәсьәләһендә яҡлаулы булырға тейеш. Мин үҙем, мәҫәлән, пенсиялағы кешеләрҙе һәр ваҡыт кире эшкә сығырға өндәнем. Уларҙың тәжрибәһе йәштәр өсөн кәрәк.

**Һеҙ ҡабул иткән закондар барыһы ла үтәләме? Ни өсөн тигәндә, яҡшы закон ҡабул ителһә лә, ул эшләмәүе бар. Белеүебеҙсә, уларҙы хөкүмәт тормошҡа ашырырға бурыслы.**

- Законға ярашлы, Дәүләт Думаһы закондарҙың үтәлешен тикшерергә бурыслы түгел. Мин халыҡтың һорауы буйынса ҡороған ағасты урмандан йыйырға рөхсәт биргән законды ҡабул итеүҙә ҡатнаштым. Закон 2019 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инәсәк. Закондың үтәлешен контролдә тотоуымды ла һорай халыҡ. Шулай уҡ спиртлы эсемлектәр һатыуҙы сикләүгә бәйле закондың үтәлешен дә контролдә тотам, уның үтәлешендә ниндәй проблемалар барлыҡҡа килеүен күҙәтәм.

**Ҡороған ағасты йыйған ваҡытта үҫеп ултырғандарын да ҡырҡырға мөмкиндәр бит. Ул ваҡытта нисек?**

- Тап шуның өсөн дә урман хужалығы белгестәре был законды ҡабул итеүгә ҡаршы булды. Мин уларға: "Улайһа, егеттәр, әйҙәгеҙ бер нәмә лә эшләмәйек. Ағастар сереп ятһын, тап шул сәбәпле янғындар сыҡһын. Улай булмай, халыҡҡа ла ағас кәрәк бит. Контроль кәрәк буласаҡ, тикшерегеҙ, ҡарағыҙ. Ул һеҙҙең эшегеҙ..." - тинем. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡороған ағастарҙы ҡырҡыу, урманды таҙартыу урман хужалыҡтарының эше. Улар йығылған ағастарҙы йыйып һатырға тейештәр ине. Улар был эште тулыһынса эшләмәнеләр, сөнки көстәре етмәне. Яңыраҡ ҡына урманды тергеҙеү буйынса тағы бер закон ҡабул иттек. Бөгөн Рәсәйҙә йылына 1 миллион 100 мең тирәһе ағас ҡырҡыла. Яңы закон буйынса, күпме ағас ҡырҡылһа, шунсама үҫенте ултыртылырға һәм уларҙың үҫеп сығыуы контролгә алынырға тейеш. Ә беҙҙә ул 40 процентҡа ғына үтәлә.

**Һалымдарҙы юҡҡа сығарыу буйынса ла закон ҡабул ителде шикелле...**

- Былтыр 22 декабрҙә ҡабул ителде ул закон. Уның буйынса, кешеләрҙең 2015 йылдың 1 ғинуарына тиклем һалым түләү буйынса бурыстары юҡҡа сығарылды, икенсе төрлө әйткәндә, һалымдарға амнистия иғлан ителде.

**Шундай философик һорау. Илебеҙ граждандары үҙҙәрен закон яғынан яҡлаулы һәм һаҡлаулы итеп тойһон өсөн ниндәй закондар кәрәк тип иҫәпләйһегеҙ? Мәҫәлән, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығында булғанда мышыларҙың ҡурсаулыҡ сиген үткәндән һуң арттарынан ҡыуа килеүсе һунарсыларға ҡаршы сығып баҫыуы хаҡында һөйләгәйнеләр. Ҡурсаулыҡ территорияһында уларҙы закон яҡлағанын хатта йәнлектәр ҙә белә икән...**

- Әлбиттә, хәҙерге көндә барлыҡ закондар ҙа камил тип әйтеп булмай. Әммә бының өҫтөндә ентекле эш алып барыла. Тормош туҡтауһыҙ үҙгәреп тора, уға ҡарап закондар ҙа үҙгәреш кисерә. Әле күпме закондар хаҡында һөйләп үттек, барыһы ла кеше хоҡуҡтарын яҡлауға арналған бит.

**Әсәлек капиталы, балалар һанына ҡарап түләүҙәр индерелһә лә, "демографик шартлау" килеп сыҡманы. Йәғни, социаль шарттар кеше тыуыуына гарантия була алмай. Мәҫәлән, беҙ бәләкәй саҡта, атайҙар бер үҙҙәре генә эшләүгә һәм бәләкәй эш хаҡы алыуға ҡарамаҫтан, ғаиләләрҙә балалар күпләп тыуҙы. Ниңә хәҙерге заманда ярты миллион самаһы әсәлек капиталы түләп тә, баланы һатып алып булмай һуң?**

- Һеҙҙең менән яртылаш килешәм, йәшәү кимәле юғары булған Европа илдәрендә лә балалар бик аҙ тыуа. Кеше ни тиклем яҡшыраҡ йәшәгән һайын, балалар һаны ла аҙыраҡ. Был - парадокс. Әммә беҙҙең халыҡта был йәһәттән шундай әйтемдәр ҙә бар, әйтәйек, "Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа" йәки "Ил өҫтөндә сәпсек үлмәй".

**Ошо уҡ һорауҙы мин дин әһеленә биргәнем булды...**

- Ул нимә тине?

**Киләсәге булмаған дәүләткә Аллаһы Тәғәлә бала ебәрмәй, тине.**

- Улар бөтә нәмәне Хоҙайға япһара инде. Нимә тиҙәр әле: "Хоҙайға ышан, әммә үҙең дә тырыш".

**Һеҙ Башҡортостанда тыуып-үҫкәнһегеҙ, эшләгәнһегеҙ. Хәҙер Мәскәү мегаполисында. Сит илдәргә сығып киләһегеҙ, илебеҙҙең башҡа төбәктәренә бараһығыҙ, сағыштыраһығыҙ һәм үҙебеҙҙең ысынбарлыҡҡа, Башҡортостанға, тыуған ауылығыҙға бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарайһығыҙ. Нисек күренә һеҙгә тыуған яғығыҙ? Үҙегеҙҙә ниндәй үҙгәрештәр тояһығыҙ?**

- Үҙгәрештәр бар инде ул. Сөнки күп кенә нәмәгә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарайһың. Урыҫтар бар нәмә сағыштырғанда беленә тиҙәр. Нисек кенә булмаһын, миңә тыуған яғым яҡын, киләсәктә лә мин Башҡортостанда йәшәйәсәкмен. Республикабыҙ бар яҡтан да матур, күркәм. Әгәр ҙә кеше ғүмер буйына ошонда йәшәһә, ситтә йөрөмәһә, йәшәгән еренең матурлығын аңлап етмәй.

Мәскәүҙә ваҡытлыса йәшәр өсөн фатир ҙа бирелде. Әммә мин унда ғаиләмде күсермәнем. Сөнки ҡыҙым киләһе йыл урта мәктәпте тамамлай. Уның Мәскәүҙә уҡыуын теләмәйем. Был ҡалала, бәлки, мөмкинлектәр ҙә күберәктер. Әммә барыһы ла ситкә китһә, республикабыҙҙы кемдәр күтәрә һуң? Яңылышмаһам, йыл һайын беҙҙең республиканан ике-өс мең йәш кеше ситкә китә. Уларҙың 90 проценты кире ҡайтмай, Мәскәүҙә, Питерҙа, Ҡаҙанда тороп ҡала. Аҡыллы, белемле йәштәр үҙебеҙгә кәрәк. Уларҙың яҙмышы тыуған еребеҙгә бәйле булырға тейеш.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Зариф Закир улы менән әңгәмәләшкәндән һуң тағы ла бер хәҡиҡәтте аңланыҡ: Законда каникулдар булмай. Дәүләт Думаһы депутаты үҙенең отпуск мәлендә һайлаусылары менән осрашыуҙар үткәрҙе, төрлө сараларҙың уртаһында ҡайнаны. Шуға ла уны, депутаттарҙың иң әүҙеме һәм вайымлыһы, тиҙәр.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Көнбикә алдағылар күренеү менән үк атын ситкә тартып, янын алдына алды. Каруанды ике урап сығыуға етте уҡтары, унан ҡылысын болғап килеп, шул ярһыулыҡ менән алышыусылар араһына барып инде.*



Үҙенең дә ике балаһын юғалтҡан ҡатынының буҙлауын тыңлап башы ҡатҡан ир, ҡаршыһындағы өлтөк сәсен елпелдәтеп, әллә һөйләүҙән, әллә кисергәндәрен ҡабат күҙ алдынан үткәргәндән ярһығандан-ярһый барған ҡыҙға ҡарап ҡалды. Унан шулай төбәлеп тора биргәс, ҡарашын тау аҫтындағы ағастар өҫтөнән үткәрҙе лә фарман бирҙе:

- Ян тарта алғандай барлыҡ ир затын бында йыйығыҙ!

Боролдо ла йүгерҙе Көнбикә. Иртәнсәккә ике йәйләүҙән йыйылған алтмышлап ир-егет тупланды. Уларға урман-ҡыр араһында ҡасып йөрөгән егермеләп һыбайлы килеп ҡушылды. Ҡарымтасылар туҙҙырып киткән ваҡ йәйләүҙәрҙән ҡалғандар ине улар. Шул көн үк эңергә баҫҡынсылар артынан ҡыуа төштөләр.

Ҡараңғы ҡуйырғанға тиклем дауам ителгән юл, аттар һөрлөгә, өркә башлағанға тиклем дауам итеп, яҡтырғанға хәтле генә ялға өҙөлдө лә, күҙ күреме алынғас, кире һуҙылды. Алғараҡ икешәр кешенән торған эҙ күҙләүселәр ебәрҙеләр. Өс төркөм өс тәңгәлдән эҙ юллап китте. Аҡкужа менән Аҡбулат та бер төркөм булып алға сыҡты. Ҡустыларының һунарҙа һағалау, күҙәтеү, эҙәрлекләү оҫталығын белгән Көнбикә, күңелен баҫып килгән ауыр уйҙарынан яҙыла биреп, улары менән ғорурланып ҡуйҙы. Хәҙер табып килер улар дөрөҫ йүнәлеште, унан башҡа ла әллә күпме мәғлүмәт менән килерҙәр әле.

Икенсе көн ауыуға алға киткән егеттәр бер-бер артлы төрлө хәбәрҙәр менән кире килеп бөттө, тик игеҙәктәр күренмәне әле. Халыҡ ҡыуып атлаған каруандың эҙенә төшөү ҙә артыҡ ауыр булмағандыр, әлбиттә. Килтерелгән хәбәрҙәрҙән, ҡасаҡтар ярты көндән дә аҙыраҡ алыҫлыҡта баралар. Йәйәү атлаған әсирҙәр, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға артыҡ ырата ла алмайҙыр, күрәһең. Тимәк, теге ике малай ниндәйҙер мөһимерәк берәй нәмә менән мәшғүл, тип уйлашты ғәскәр башлыҡтары ла.

Урман-тауҙар һеҙәгәйеп, асыҡлыҡтар киңәйгәндән-киңәйә барған бер ерҙә, алдағылар туҡтап, арттағы рәттәрҙе боҙҙо. Алдағылар араһында шау-шыу, асыулы һөрәндәр ишетелә башлағас, әҙәп һаҡлап, артта, иң йәш малайҙар араһында юртып килгән Көнбикә, нимә булғанын белергә теләп, ғәскәр ситенән ҡыялап, алға үтте. Барған һайын үҙенә төбәлгән сәйер ҡараштарҙан албырғаны. Йәш егет-елән күҙҙәрен киң асып, олораҡтар ҡарашын йәшереп ҡалды. Нимә булырға мөмкин?

- А-а-ау-у!.. - менгеһенән әллә ҡолап, әллә шыуып төштө ҡыҙ. Төштө лә ялан уртаһындағы тәпәш йыуан ике ҡарағайға бәйләп ҡуйылған һындарҙан күҙен ала алмай, сайҡалып килеп, алдарына ҡоланы.

- А-а-айй!.. - тубыҡланған килеш әле береһенә, әле икенсеһенә ынтылды, үҙ тауышын үҙе ишетмәй ыңғырашты. - А-ауу...

Уның ҡустылары, икеһе ике ағасҡа ҡайырып бәйләнгән дә, ҡорһаҡтары буйҙан-буйға һуйылып, эсәк-ҡарындары бүһерелешеп, эленеп торалар ине. Баштары һәленешеп төшкән малайҙарҙың. Эргәләрендә әрһеҙ күк себендәр күс айырғандай геүләшә. Был күренештән хатта күпте күргән, йәшәгән һуғышсылар ҙа ҡапылдан ҡалайтырға белмәгәндәй ҡалды.

- А-а-аhh! Ы-ыh... - Көнбикә бер ҡустыһының аяҡтарын барып ҡосаҡланы, күтәрергәме, тартып төшөрөргәме маташты, әммә үле кәүҙә олонға ҡуша ныҡ бәйләнгән ине. Шул саҡ ирҙәр иҫтәренә килеп, ярҙамға ташланды. Тиҙ арала кәүҙәләр ысҡындырылып, йәнәшләп һуҙып һалындылар. Көнбикә һаман улар араһында имгәкләне, ҡалтыранған ҡулдары менән ҡустыларының эсәктәрен йыйып һалырға, ҡатҡан аяҡ-ҡулдарын яҙырға маташты, биттәрен ыуҙы, күҙҙәрен астырмаҡ булып тартҡыланы. Унда ла булмағас, башта шыбырлап, унан ҡысҡырып уҡ саҡырыуға күсте:

- Аҡкужа... Аҡбулат... Аҡкужа... Аҡбулат...

Ир-егеттәр, уратып баҫып, урталағы үлектәр араһында аҡылын юйғандай булып буталанған ҡыҙҙың асырғанып ҡысҡырыуҙарын, берсә илап, берсә һамаҡлап саҡырыуҙарын тыңлап, тештәрен ҡыҫып, йоҙроҡтарын йомдо. Улар ҡыҙҙы шулай иҫен юйғансы сәбәләнер тип, сабырлыҡтарын йыйып торҙо. Тик был йомшаҡлыҡ оҙаҡҡа барманы. Бына бер мәл ул малайҙар араһында ултырып тынып ҡалды. Унан күҙ йәштәре менән ҡан ҡатыш тупраҡҡа буялып, унан да бигерәк таш булып ҡатҡан йөҙөн күтәрҙе. Күҙҙәре ырғырға әҙерләнгән бүренеке ише ҡырағай ялтырайҙар ине. Ҡалҡынған ыңғайы ул бер генә һүҙ ташланы:

шауҡым юҡ ине уларҙа. Тап ана шул утлы ярһыу, үс ҡомары, теш менән боғаҙҙы йыртыр айбарлыҡ менән алдырҙы башҡорттар.

Көнбикә ҡан еҫенә иҫерҙе, ҡылыс сыңы, ҡысҡырыш, яралылар тауышынан ҡолаҡтары тондо. Туҡтауһыҙ уңлы-һуллы һелтәнгән уң яҡ яурынбеләге иҫен юйҙы, йүгәнен урап тотҡан усын нәҙек күн ышҡып ҡанатты. Тик быларҙың береһен дә ул тойманы. Күҙ алдында эстәре бүҫелеп ятҡан ике һын да, дошман ғына булды. Киҫте лә сапты, киҫте лә сапты. Үткер ҡылыс йөҙө сыйған яраларҙан һибелгән йылы ҡан битенә, өҫтөнә һирпелә торҙо. Йәй башындағы уйынкөлкө эҙләп йөрөгән үҙ һүҙле иркә ҡыҙ түгел, ә күҙҙәре зәһәр ҡыҫылған, ирендәре ҡымтылған аяу белмәҫ яугир, ҡаршы сығыусылар йөрәгенә ҡурҡыу һалыр, йәнде ҡыйыр һуғышсы ине ул.

Ҡараңғы төшөп тә өлгөрмәне, бөләңгерт эңер ҡанатын йәйеп килеп төшөүгә, ҙур булмаған ҡаҙаҡтар төркөмө һөҙәк тау итәгенә ҡыҫып алынды. Түңәрәк һаман тығыҙая, бәләкәйә барғас, улар ҡорал һалырға




- Аттарға!

Уның артынан, шул ауазды ғына көткән, үс ҡомарынан янып буҙарған егеттәр, ҡарсығалай булып, менгеләренә осоп ҡундылар. Оранһыҙ ҙа, ҡый-ҡыуһыҙ ҙа, ҡорбанын ҡыуған йыртҡыстай, аттарынан алға сығырҙай булып ярһыны улар.

Шул ҡыҙыулыҡ менән киске ялға туҡтап торған каруандың өҫтөнә барып та менделәр. Бындай уҡ ҡыуғынды көтмәгән ҡаҙаҡтар, ҡапылда албырғап ҡалһа ла, ҡарымтала йөрөп йышылған нәмәләр, йәһәт хәрәкәт итеү алымдарын белә. Күҙ асып йомғансы, һыбайлылары ла, уҡсылары ла үҙ урынын биләне.

Көнбикә алдағылар күренеү менән үк атын ситкә тартып, янын алдына алды. Каруанды ике урап сығыуға етте уҡтары, унан ҡылысын болғап килеп, шул ярһыулыҡ менән алышыусылар араһына барып инде. Мал өсөн түгел, йән өсөн барған тураҡлаш булды был. Ҡыуа килеүселәрҙең күҙенә аҡ-ҡара күренмәне, улар һаҡланыуҙы ла, ҡурҡыуҙы ла, хатта ҡоралдан ялтарыуҙы ла белмәне. Был ажарлыҡтың яралы януар өҙөшө икәнлеген дошмандар ҙа һиҙмәне түгел. Үҙҙәренекенең яртыһындай ғына булған һуғышсыларҙың ирегә юлы юҡлығын, булғанда ла уларҙың инде китмәҫен, йәки ошонда ятып ҡалырға, йә яҡындарын алып китергә килгәндәрен аңлаған баҫҡынсылар ҙа бирешергә теләмәне. Тик нисек кенә булмаһын, һөжүм итеүселәр саялығы, уларҙы хәрәкәт иттергән, үлемгә ташлаған булды. Тик башҡорттар был алымға күҙ йомдомо, әллә аңғарырлыҡ, ҡабул итерлек йәки ярлыҡарлыҡ хәлдә булманылармы, ҡыҫыу һәм сапҡылашыу дауам итте. Баҫҡынсыларҙың һуңғылары менгеләренән һикерешеп төшөп, баштарын ҡосаҡлап ергә ауғас та, ҡанығыусылар, ҡылыстарын күтәреп, бер тирәлә әйләнеште. Улар әле һыуына алмай, алыш, үлтереш ярһыуынан ҡотола алмай ине. Көнбикә лә шулар араһында буталды. Алан-йолан ҡаранып, һелтәп осорор берәүҙе эҙләне. Шулай уҡ алаҡанлаған менгеһе лә, башҡа аттар менән бәрелә яҙып, ауыҙлығын сәйнәп, башын юғары күтәреп өйөрөлөпсөйөрөлдө. Ниһайәт, фарман булды:

- Яралыларҙы ҡарарға! Үлектәрҙе йыйып алырға!

Ул арала, үҙҙәренең өҫтөнлөк алғанын аңғарған әсирҙәр ялан тултырып тәгәрәшеп ятыусылар араһында йүгерешә, тереләргә ярҙамлаша, туғандарын, яҡындарын эҙләй, саҡыра, ҡысҡырыша башланы. Тағы шау-шыу, сар-сор иткән ауаздар менән тулды киске һауа. Унда-бында усаҡтар ҡабыҙылды. Ҡатын-ҡыҙ яраларҙы бәйләне, ир-егет үлгәндәрҙе йыйып теҙҙе. Ясин сығылды. Төн яуҙа ауғандарҙы көтөп уҙғарылды ла, ҡояш күтәрелә башлау менән үк, оло ҡәбер ҡаҙылып, мәйеттәр ерләп ҡуйылды. Баҫҡынсылар ситтәрәк икенсе ҡәбергә урынлаштырылды. Был эштәр тамамланғас, кисәге илап-һыҡтап атлаған каруан кирегә боролдо. Тәпәй бара алған балаларға тиклем арбаларға ултырманы, аяҡтары үҙҙәренән үҙҙәре йүгертә ине уларҙы. Эй, тыуған ер ҡөҙрәте...

* * *

Баҫҡынсыларҙың ҡабаттан килеү шөбһәһенән, янған-ватылғанды тергеҙеп тормай, ашыға-ашыға ҡышлау урындарына күсенде халыҡ. Ҡалған малды йыйнап, өйөрөп, тауҙарға ҡыуҙылар. Шунда ла, ниндәй һаҡлыҡ сараһын күргәндә лә, дошман кире килә торған булһа, ҡаршы тора алмаҫтарын күҙаллап борсолоп торғанда, бей фарманы буйынса, ҙур булмаған ғәскәр башында Айыухан ҡайтып төштө. Ғаиләһендәге ҡот осҡос юғалтыуҙарҙы ул нисек кисергәндер, уныһы берәүгә лә билгеле түгел. Бары тик күҙ ҡараштарындағы төпһөҙ хәсрәт тә, маңлайына ятҡан тәрән бураҙналар ғына уның ҡайғыла икәнен аңғарта. Аҙнанан ашыу өнһөҙ-телһеҙ ҡалыуы ла шуның шауҡымылыр.

Бер аҙ баш-күҙ алғас, Айыухан улы артынан килде. Әммә йүргәктә ҡорт шикелле генә булып йыбырлаған ике айлыҡ сабыйҙы ҡалайтып ҡулына алырға, нисек итергә икәнде лә белмәне. Шунда Хафиза менән Айымбикә йәш иргә ярҙамға килде, һылтау өҫтөнә һылтау табып, һылапһыйпап, сабыйҙы үҙҙәрендә ҡалдырып торорға өндәне. Ҡарт әсәһенән, ҡатынынан, әллә күпме зат-ырыуынан бер юлы яҙған һәм әле бала тәмен белмәгән иргә күнеүҙән башҡа юл да юҡ ине. Шулай ҙа ул Аллағол ауылдарының именлеген белешә йөрөгәндә лә, башҡа яйы сыҡҡанда ла, улын күреп китеүгә туҡталды. Шундай бер килеүендә Көнбикә уның юлына сыҡты. Аллағолдоң был ҡоралай күҙле һеңлеһен тәүге осрашыуҙарынан алып нисек тә күрмәҫкә, күргәндә лә иғтибар итмәҫкә тырыша ине Айыухан. Әллә нисек, уның тыныслығын боҙа, йөрәген нығыраҡ һуғырға, һулышын йышайтырға мәжбүр итә ошо... бисура инде, ни әйтерһең. Әле лә килде лә әйтергә теләгәнен ярып һалды:

- Өйөр артынан китәм. - Айыухан аптырауҙан ҡаштарын ғына ҡалҡыта алды.- Атамдың туғай ябып йөрөгән йылҡыһын биреп ебәреп, малдың менгелә миктәгәндәренә генә ҡарап ҡалдыҡ. Ат алыштырыр ҙа хәлебеҙ юҡ. Атам ҡайтһа, йәне сығып китер.

- Көнбикә... Абдрахман бейҙең ҡайтырына өмөт бик самалы...

- Ул осраҡта бигерәк тә! Уның төҫө булған буҙ айғырҙы яттар ҡулында, ситен ерҙә зарыҡтыраһым юҡ!

- Буҙ айғыр йәнеңдән ҡиммәтме, алйот ҡыҙ!

- Аҡбуҙат тоҡомонан булған Буҙайғыр ҡаҙаҡ далаһында ер имшегәндә, минең йәнем генә нимә...

Айыухан итектәре осона ҡарап, уйлана биреп торҙо.

- Нисек итеп тартып алырға уйлайһың өйөрҙө? Беҙҙең ҡарымтаға йөрөрлөк яугирҙар юҡ. Ҡалайтҡанда ла, ҡышты сығып, төп көстәр ҡайтҡанды көтөргә ҡала.

- Уларҙы көтөр әмәлем юҡ. Һиҙеп торам, Буҙаттыҡы ла юҡ. Мин үҙемсә уйлағанмын инде.

- Уйлағанһың? Уйлай беләм тиген тағы! Алабарманлығыңдың сиге бармы?

- Булмаһын, - ҡыҙ башын үргә күтәреп, туп-тура ҡараны ирҙең күҙҙәренә. - Миңә ғәскәр кәрәкмәй, бер үҙем китәм.

Шулай тине лә боролоп та китте. Айыухан шартлай яҙып ҡарап ҡалды. Тотоп ҡына ярыр йә бикләп тә ҡуйыр ине, был бисураға уның бер ниндәй ҙә хужалығы юҡ.

**(Дауамы бар).**

✓ *Тамаша залында 10 кеше ултырған ваҡыттар ҙа булды. Ләкин мин туҡтаманым, килеп сыҡмай тип, ташлап ҡуйманым. Аллаға шөкөр, бөгөн ҡайҙа ғына барһаҡ та, залдар тулы.*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# ХЫЯЛЛАНЫҒЫҘ...

## Барыһы ла хыялдан башлана



**Кешенең иң матур сифаттарының береһе - хыяллана белеү. Тап хыялдар күңелдә ут тоҡандыра, арыу белмәйенсә тәүлегенә 20 сәғәт эшләргә көс бирә. Ҡыҫҡаһы, хыялдары булған кеше генә мөғжизә тыуҙырыу һәләтенә эйә. "Zainetdin" проекты авторы, мультиинстументалист, республика, Бөтөн Рәсәй һәм халыҡ-ара бәйгеләр лауреаты Заһир Зәйнетдинов та, барыһы ла хыялдан башлана, тип раҫлай. Йәш музыкант менән әңгәмәбеҙ ҙә уның ижад юлы, үҙенсәлекле проекты һәм, әлбиттә, хыялдары тураһында.**

➔ **Заһир Зәйнетдиновты беҙ бейеүсе, ҡумыҙсы, ҡурайсы, КВН-сы итеп беләинек. Был һөнәрҙәрең һине "Zainetdin" проектына алып килде, донъя һине ошо исем менән таный. Уңышҡа илткән юл ҡатмарлы булдымы?**

- Бәләкәйҙән мин үҙемде эҙләнем. Эстәге ниндәйҙер тойғо тынғы бирмәй торғайны. Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернатында уҡығанда бейенем дә, йырланым да, ҡурайҙа ла уйнаным, КВН-сы булып та киттем. Бөтөн нәмә ҡыҙыҡ ине миңә. Гимназияны тамамланым, тик аңлай алмайым: кем ул мин, ниндәй һөнәр эйәһе буласаҡмын? Бейеү буйынса уҡытыусым - бейеүсе, йыр уҡытыусыһы - йырсы бул ти, тромбон буйынса белем биргән остазым Мәскәүгә уҡырға бар, тромбонсы булырһың, тип кәңәш бирә. Шунда мин тәүге тапҡыр етди итеп киләсәгем хаҡында уйландым. Концерттар, шоу-программалар эшләгем килгәнен аңланым. Быларҙың барыһын да ойошторор өсөн белем дә, рухи ныҡлыҡ та кәрәк, шуға ла мин З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтына режиссер һөнәрен үҙләштерергә юл тоттом. Оҙаҡ та уҡыманым, күңелгә нимәлер етмәй башланы. 5 йыл буйына уҡып ҡына ла ята ала инем, быйыл тамамлар инем, мине бер кем дә белмәҫ ине. Ошо ваҡытта режиссер дипломын тотоп, эш эҙләп йөрөгән булыр инем. Тик мин был һил һуҡмаҡтан бара алмай инем. Беренсе курста уҡ параллель рәүештә бизнес менән дә шөғөлләнеп ҡараным. Уларҙың ҡайһы берҙәре янды, ҡайһылары килем урынына зыян ғына килтерҙе, ҡайһыларында нимәлер сығарып ҡалдым. Әммә тәжрибә тупланым. Ике айға Сочиға йәшәргә киттем, Ҡаҙанға барып йәшәп тә ҡараным.

➔ **Яҙмыш һынауҙарына бирешеп бармау, төшөнкөлөккә бирелмәү кеүек сифаттарың да ярҙам иткәндер һиңә?**

- Нимәлер булһа, ниңә улай булды һуң әле, тип уйланам. Тимәк, башҡасараҡ эшләргә кәрәк, йә был бөтөнләй минеке түгелдер тигән һығымта яһайым да, икенсе идея менән яна башлайым. Беренсе курстан һуң ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсеүемде лә, Стәрлетамаҡ бейеү театрына барып, мине бейеүсе итеп алығыҙ, тип әйтергә ҡыйыулыҡ табыуымды ла ошоноң менән аңлатырға булалыр. Шул уҡ ваҡытта "Бытбылдыҡ" КВН командаһы менән уйнап йөрөнөм. Таңғы 6-ла Өфөнән Стәрлетамаҡҡа сығып китәм, кисен 5-7 тирәһендә тағы Өфөгә, репетицияға барам. Шул йылда беҙ чемпион булдыҡ. Машинам да юҡ ине ул ваҡытта, автобус менән йөрөнөм һәм бының бер ауырлығын да күрмәй инем, сөнки теләк ҙур булды. КВН да ҙур мәктәп ине минең өсөн, бейеү театры ла ҙур мәктәп, улар мине төрлө яҡлап үҫтерҙе. Тик ике йыл бейеп, бөтөн бейеүҙәрҙе, трюктарҙы өйрәнеп бөткәс, бейеү театрынан китергә булдым. Рөстәм Ғиззәтуллин менән танышып, ул мине гастролдәргә саҡырҙы. Бейеүсе, ҡурайсы, алып барыусы булыу өҫтөнә, мин йырлай башланым. Шулай ҙа был мин хыялланған кимәл түгеллеген аңлай инем. Ҙурыраҡ эштәргә тотонғо килә ине. Бер тапҡыр ҡумыҙҙа уйнап ултырғанда, ҡушылып уйнар өсөн ритмик музыка эшләргә кәрәк, тигән идея килде. Рөстәм Ғиззәтуллин менән бергәләп беренсе көйҙө яҙҙыҡ. Үҙебеҙгә лә оҡшаны ул, ниндәйҙер яңыса ҡараш булды. Дәртләнеп киттек, бер аҙна эсендә 4-5 көй эшләнек. Маҡсатыбыҙ - ҡайҙа ғына сығыш яһамайыҡ, тамашасы тороп, бейей башларлыҡ булырға тейеш ине. Ҡыҙыҡлы проект булмаҡсы тип, ихлаҫлап тотондоҡ. Ошо уҡ мәлдә мин Айҙар Ғәлимовтың театр-студияһында эшләп йөрөнөм.

Бер нисә көй эшләгәс, Республика халыҡ ижады үҙәгенә барып, сит илдә үткән берәй фестивалдә ҡатнашырға теләк белдерҙек. Шулай итеп Таулы Алтайға барып ҡайттым. Сығышымдан һуң журналистар уратып алды, кем һеҙ, нишләп беҙ һеҙҙе белмәйбеҙ, тип һорайҙар. Сит тамашасыға оҡшай икән, тимәк, дөрөҫ юлдан барам, тип уйлап ҡайттым. Әлеге көндә көйҙәрҙе Мәскәүҙә яҙҙырабыҙ, сөнки сифат мотлаҡ булырға тейеш. Мин генә түгел, продюсер булараҡ Рөстәм Ғиззәтулин да бөтөн килемде ошо проектҡа һалабыҙ. Йыл ярым ваҡыт эсендә 15-ләгән сит илдә булып ҡайттыҡ, Өфөлә ҙур концерт булды, Башҡортостан буйлап гастролдәр үтте.

➔ **Сит ерҙәрҙә башҡорт музыка ҡоралдарына, башҡорт мәҙәниәтенә мөнәсәбәт ниндәй?**

- Беҙ бер кемдән дә кәм түгелбеҙ, киреһенсә, Хоҙай тәғәлә беҙгә ҡурай кеүек уникаль музыка ҡоралы биреп, күңелдәребеҙгә моң һалып, беҙҙе күтәргән. Ҡурайға һоҡланмаған кеше юҡ. Әлбиттә, мин профессиональ ҡурайсы түгел, уны бар нескәлегендә тамашасыға күрһәтә лә алмайым. Был минең маҡсатым да түгел. Һис һүҙһеҙ, ҡурайҙа юғары кимәлдә уйнау өсөн күп шөғөлләнәм, был яуаплылыҡты ла үҙемдән алып ташламағанмын. Әлегә мин төрлө уйын ҡоралдары ҡулланып, шоу эшләйем. Сығышымдан һуң йәштәрҙең килеп, ҡурай бик модалы уйын ҡоралы икән, тип әйтеп китеүе лә беҙҙе ситтәр араһында танытыуға ҙур эш башҡара.

Эш башлағанда уҡ көйҙө ҡатмарлаштырғы килмәй ине. Ябай, еңел көйҙәр булһын тип уйланыҡ. Мондоң бит теле юҡ, ниндәй генә милләт тыңлаһа ла, аңлай уны.

➔ **Маҡсат ҡуя, уға өлгәшә белеү атай-әсәй тәрбиәһенән дә киләлер, моғайын?**

- Тыуған ерем - Мәсетле районы Һөләймән ауылы. Атайым менән әсәйем икеһе лә уҡытыусы, спортсы. Бик музыкаль ғаилә итеп беләләр беҙҙе бында. Зәйнетдиновтарҙың 74 кешенән торған ҡумыҙсылар ансамбле лә бар. Өләсәйем һөйләүенсә, йырламаһалар, мин йоҡламағанмын. Инде йоҡлап китте тип йырлауҙан туҡтаһалар, уяна ла ҡуям икән. Шуға алмашлап йырларға тура килгән уларға. Атайым ҡурай уйнап та йоҡлатҡан. Көн һайын өйҙә концерт ҡуя инек, атайым йырларға ла, бейергә лә, ҡурайҙа уйнарға ла өйрәтте. Ҡумыҙ буйынса уҡытыусым - Миңлеғәфүр ағайым.

Атай менән әсәй беҙгә гел ышанды, хәҙер ҙә ышаналар. Дөрөҫ тип уйлайһың икән, эшлә, тиҙәр. Кәңәш тә бирәләр, әлбиттә, тик һайлау үҙебеҙҙән. Шуға ла минең үҙемә ышанысым да көслө, күрәһең.

➔ **Уңыш - ул тырышлыҡмы?**

- Һис шикһеҙ. Миңә, ҡумыҙҙа уйнаһам да, уйнамаһам да эш хаҡы килеп тормай. Кисәгегә ҡарағанда яҡшыраҡ эшләү өсөн тырышырға, репетициялар үткәрергә кәрәк. Тамаша залында 10 кеше ултырған ваҡыттар ҙа булды, ҡайһы саҡта кеше булмау сәбәпле, концерт булмаған осраҡтар ҙа булды. Ләкин мин туҡтаманым, килеп сыҡмай тип, ташлап ҡуйманым. Аллаға шөкөр, бөгөн ҡайҙа ғына барһаҡ та, залдар тулы. Беҙҙең видеоларҙы ҡарап, балалар концертҡа ҡурай, ҡумыҙ алып килә - был яҡшы бит! Шулай уҡ ут, тауыш, сәхнәне биҙәү өҫтөндә гел эшләргә кәрәк, сөнки был шоу. Гастролдәргә ҙур ҡоролмалар йөрөтәбеҙ, профессиональ тауыш, яҡтыртыу булһын, тибеҙ. Ғөмүмән, мин кимәлде төшөрөргә уйламайым, ҙур маҡсаттар ҡуйғанбыҙ алдыбыҙға. Башҡорттарҙы ситтәр әле аҙ белә, сөнки беҙ аҙ йөрөйбөҙ. Шуға ла эшләй торған эш күп әле. Бер кем дә еңел була тимәй, кемдер был юлда ауырлыҡтарға бирешәсәк, кемдер еңеүсе буласаҡ. Уңышлы кешеләр әйтә бит, иң мөһиме - теләк. Аҡса юҡ, тегеһе-быныһы ҡамасаулай тиһәң, ғүмер буйы нимәлер кәртә буласаҡ. Теләгең бар икән, күп уйламаҫҡа кәрәк. Шуға ла беҙгә был эшкә тотонорға һәм тырышырға ғына ҡала.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Мәңгелек һорау

Михаил Евграфович Салтыков-Щедриндың "Ҡырағай помещик" ("Дикий помещик"), "Аҡыллы ташбаш" ("Премудрый пескарь") әҫәрҙәрен яңынан ҡарап, күҙ йүгертеп сыҡтым. Бөйөк рус яҙыусыһы, әйтерһең дә, бөгөнгө хәл-ваҡиғаны, беҙ йәшәп ятҡан мөхиттәге көнитмеште яҙған! Ғәжәйеп оҫта һүрәтләгән, маһир, ҡабатланмаҫ һөнәрсе булараҡ, шул замандағы кешеләрҙең характерҙарын юғары художество кимәлендә асҡан. Әҫәрҙәр сиселмәҫ йомаҡтай, асылмаҫ серҙәй, билдәһеҙҙәре күп бирелгән математик мәсьәләләй нисәнсе көн тынғылыҡ бирмәй күңелгә. Ә бит һорауы ла тәү ҡарашҡа үтә лә ябай ғына: әлеге мәлдә ниндәй быуатта, ҡайһы ерҙә йәшәп ятабыҙ, һәм ҡылған эштәребеҙ, йәшәү рәүешебеҙ, эске донъябыҙ менән беҙ кем? Кем беҙ? Өңөнә бикләнгән, кеше йөҙөн юғалта барған бер ҡырағаймы, примитив фекерләгән, ағым ыңғайына йөҙгән бахыр ташбашмы? Ошо мәңгелеккә юл алған һорауға яуап биреүсе табылыр микән бер ҡасан? Әллә 100-200 йыл үткәс тә рухи үҫеш йәһәтенән 19-сы быуатта ҡалған замана уҡыусыһы яҙыусының тәрән мәғәнә, нескә кинәйә һалынған әкиәттәренә осраҡлы юлығыр ҙа: "Карасәле, ике быуат үткән, әммә йәмғиәтебеҙҙә бер ни ҙә үҙгәрмәгән бит, ә яҙыусы шартына тап килтереп, бөгөнгө көндө, бөгөнгө көнитмеште ҡылыҡһырлаған да баһа!" - тип аптырар микән?..

### Боҙоҡ телефон

Күршебеҙҙә урыҫ бабайы йәшәне. Әбейе үлеп киткәс, яңғыҙы көн итте. Ишле саҡта ингеләйҙәр-сыҡҡылайҙар ине, бер үҙе ҡалғас, уның тураһында оноттолар. Донъя хәлен белеп булмай, хәлемде белгеләп тор, тигәс, оло кешенең һүҙен йыға алмай, янына бик йыш ҡына һуғыла инем. Бер инеүемә ул кеҫә телефонын әҙерләп ҡуйған:

- Ошо телефон нишләптер эшләмәй һуңғы осор.
- Батареяһының көсө бөткәндер.
- Көн һайын зарядкаға ҡуям.
- Үҙең берәйһенә шылтыратып ҡараныңмы һуң?
- Балалар һатып алып бирҙеләр быны. Саҡырыу ишетелһә, бынау йәшел кнопкаға баҫам да тыңлайым. Бар белгәнем шул.

Алып барҙым телефонды ремонт оҫтаханаһына. Мастер ҡараны ла телефондың төҙөклөгөн әйтте. Мин дә иғтибар итмәгәнмен: дисплей яна, махсус тамға бәйләнеш барлығын күрһәтә. Исемлек теҙмәһенә инеп ҡараным, унда сын, дочка тигән ике һүҙ генә яҙылған. Уларға шылтыратып, атайҙарының барлығын онотмауҙарын, бәйләнешкә инеү өсөн телефонына аҡса һалып тороуҙарын талап иттем. Ҡатыраҡ, ҡырҡыуыраҡ та һөйләштем шикелле, тегеләр ваҡыттары юҡлыҡҡа, эштәренең күплегенә һылтандылар, ғәфү үтенделәр.

Бабайҙың фатирына барып инеү менән телефон телгә килде.

- Йүнәттерҙегеҙме?
- Күреп тораһығыҙ бит!

Йорт хужаһы башта улы, шунан ҡыҙы менән һөйләшкәндән һуң, миңә һораулы ҡараны:

- Башҡаса боҙолмаҫмы?
- Боҙолмаҫ. Телефоныңдың аҡсаһы ла бөтмәҫ, тик үҙеңде лә, телефоныңды ла даими зарядкалап торорға онотма!
- Мин ни, бер тәүлеккә етмәле зарядканы алдым да инде! - Яҡындары менән аралашыуҙан күҙҙәре янып киткән бабай эскерһеҙ йылмайҙы.

ИНТЕРНЕТТАН



# КАЛЬЦИЙ... емеш-еләктә

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендәгеләрҙең флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Организмды кальцийға байытам тип өҫтәмә рәүештә дарыуҙар ҡулланыуҙың бер файҙаһы ла юҡ, тип белдерә табиптар. Яңы Зеландиялағы Окленд университеты ғалимдары оҙайлы тикшеренеүҙәр үткәргән, унда өҫтәмә рәүештә кальций ҡабул иткән 50 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар ҡатнашҡан. Ҡабул ителгән фекерҙәр буйынса, һөйәктәре һынып яфаланыусылар тәүлегенә 1000-1200 миллиграмм кальций ҡабул итергә тейеш. Әммә һынауҙар күрһәтеүенсә, был кәңәш һәр ваҡытта ла һөҙөмтә бирмәй. Баҡтиһәң, уның 1-2 проценты ғына үҙләштерелә икән. Етмәһә, кальций һөйәктәр һыныуы хәүефен булдырмай тигән раҫлауҙар юҡ. Киреһенсә, кальций ҡабул итеүҙән ашҡаҙан-эсәк тракты зыян күреүе ихтимал. Әйткәндәй, был яңылыҡ өлкәнәйгәс һөйәктәрҙе кальций һаҡламай, тигәнде дәлилләүсе икенсе асыш. 2010 йылда АҠШ-та остеопорозды иҫкәртеү һәм һөйәктәрҙең сәләмәтлеген һаҡлау буйынса киңәйтелгән эксперимент уҙғарылғайны. Ул ваҡытта ғалимдар һөт аҙыҡтарына ҡарағанда еләк-емештең һәм йәшелсәнең организмға кальцийҙы күберәк биреүе тураһында белдергәйне. Бына шуның өсөн дә Азия илдәрендә остеопороз осраҡтары күп теркәлмәй. Япония халҡы Америка халҡына ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй һәм улар кальцийға бай һөт ризыҡтарын бөтөнләй тиерлек ҡулланмай. Ә Евросоюз илдәрендә һөт һәм һөт ризыҡтарын күп ҡулланалар һәм унда остеопороз менән күптәр ауырый.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ



# БАШҠОРТ АҪАЛЫ БАЛАҪЫ

Артабан, 2000 йылда, Миәкә районы буйлап аҫалы балаҫ һуғыусылар тураһында фильм төшөргән саҡта аҫалар даръяһына мин инде тотош сумдым. Боғҙан ауылынан башланған телевизион сәфәрҙе ауыл ҡатындары бик тантаналы ҡаршыланы - урамдың ике яғынан буйлатып рәшәткә-ҡойма баштарына балаҫтарын элеп сыҡҡандар. Иҫ киткес күренеш! Береһенән-береһе яҡты, мөхәббәтле, илһамлы аҫалар менән тирә-яҡ балҡып тора ине. Бикҡол, Күл, Ҡаран, Илсеғол, Тамъян-Таймаҫ, Шатмантамаҡ, Елдәр, Баязит, Айыт ауылдарының оҫталары беҙҙең "Миәкә йәйғоро - аҫалы балаҫ" тигән фильмда ихлас ҡатнашты, һөнәр серҙәре менән бүлеште. Режиссер Вилүрә Иҫәндәүләтова, оператор Эдуард Заһиҙуллин менән был ябай



ҡатындарҙың ғәжәп талантлы, аҡыллы һәм булдыҡлы кешеләр икәнен күреп аптыраныҡ.

2001 йылда яҙылған "Аҫыл йөрәк" тигән пьесамдың идеяһы ла тап Миәкә яғы аҫаларынан башланды, халҡыбыҙҙың алтын ҡулдарына һәм серле аҫаларына бағышланған спектакль Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә бер нисә йыл барҙы.

* * *

Һарыҡ йәки кәзә йөнөн иләп, буяп, билдәле бер орнамент, геометрик фигура менән аҫалап һуғылған балаҫ "аҫалы балаҫ" тип атала. "Аҫа" һүҙенең мәғәнәһе, бер яҡтан, балаҫ һуғыу ысулын аңлата, аҫалап, биҙәк һалып, ептәрҙе аҫалап-айырып арҡыры йөн ептәрҙе үткәреп һуғыу менән бәйле. Халыҡта балаҫ аҫалау, аҫалап һуғыу, тип һөйләйҙәр.

"Аҫа" һүҙе балаҫҡа ҡуйылған, йәғни һуғылған орнаментты, биҙәкте лә белдерә. "Биҙәк һалыу" мәғәнәһендә "аҫалау", "барсалау", тигән һүҙҙәр ҡул эше оҫталары телмәрендә йыш осрай.

Боронғо, ҡатмарлы, зауыҡлы һәм серле күренеш булған аҫалы балаҫ башҡорттар йәшәгән бөтә ерҙә лә осрай. Ҡайһы бер яҡта уны "йөн балаҫ", "келәм", "көйөҙ" тип тә йөрөтәләр. Урал арьяғында - Баймаҡ, Учалы, Бөрйәндә, көньяҡта - Күгәрсен, Хәйбулла, Белоретта йәшәгән аҫалы балаҫ оҫталарының эше милли музейҙарҙы, каталогтарҙы биҙәй. Ғафури, Архангел, Ауырғазы, Шишмә, Ҡариҙел, Аҫҡын ауылдарында да балаҫ һуғыусылар тағы ла күберәк. Иллә мәгәр аҫалап балаҫ һуғыу Дим-Өршәк йылғалары буйында йәшәгән мең ырыуы башҡорттарында айырыуса киң таралған. Бишбүләк, Миәкә, Әлшәй, Дәүләкән яғында аҫалы балаҫтар әле лә һуғыла. Мең ырыуы башҡорттарының тарихын өйрәнеүсе ғалим, тарих фәндәре кандидаты Рәфил Аҫылғужин меңлеләрҙә балаҫты аҫалап һуғыуҙың төп халыҡ кәсебенә әйләнеүен был ҡәбиләнең нисек барлыҡҡа килеүенә һәм йәшәү рәүешенә бәйләп аңлата. Алтын Урҙа дәүерен оҙағыраҡ һаҡлар-яҡлар өсөн, хан ҡушыуы буйынса, Урта Азия тауҙарынан, Каспий яны сүллектәренән, Һырдаръя менән Амударъя буйынан төркөм-төркөм халыҡтар аты-малы, бала-сағаһы менән ҡуша әйҙәлеп, бер ғәскәр итеп туплана. Был ғәскәрҙең башлығын Мең һаҙаҡлы Урҙас бей тип йөрөтәләр. Урҙас бейҙең мең һаҙаҡлы яуы башта Яйыҡ буйында, Көньяҡ Урал далаларында тора. Әйткәндәй, был ҡәүемдең теле Сырдаръя яғында һәм Алтын Урҙала дөйөм дәүләт һөйләше һәм әҙәби тел ролен үтәгән сығатай теле була. Меңле йәки мең ҡәбиләһенең ун бер ырыу-тармаҡтан тороуы ла уларҙың төрлө сығышлы, әммә бер телле, бер маҡсатлы итеп тупланған халыҡ икәнен күрһәтә. Меңлеләр Башҡортостандың Асылыкүл, Дим, Өршәк, Өйәҙе, Сәрмәсән йылғалары буйында, Ағиҙелдең урта ағымы тирәһендә төпләнә, монгол-татар яуҙарынан имен ҡалған башҡорт ырыуҙары менән ҡатнаша, башҡорт халҡының бик ҙур ҡәбиләһе булып китә. Уларҙың көнкүреше, кейеме, аш-һыуы, бигерәк тә аҫалы балаҫ һуғыуы көньяҡтағы төрки ҡәбиләләрҙең - төркмән, үзбәк, алтай традицияларын дауам итә. Боронғо башҡорт буй балаҫтарынан тыш, аҫалап һуғыу йыш осрай меңләләрҙә. Көньяҡ Уралда шулай уҡ киң таралған табын ҡәбиләһе ырыуҙары аҫалы балаҫ һуғыу серҙәрен Урал арьяғы, Ағиҙел, Ыҡ, Кама буйҙарына күсерә.

* * *

Оҫталарҙың да оҫтаһы, "Башҡорт балаҫы" республика фестивалдәре лауреаты, башҡорт аҫалы балаҫын бөтә Рәсәй халыҡ һөнәрҙәре күргәҙмәләренә алып сығыусы фиҙаҡәр йән - Дәүләкән районы Ҡоръятмаҫ ауылынан Назыя Фазлый ҡыҙы Әхмәтвәлиева. Легендар оҫта булып танылды Назыя апай, ул ҡанлы һәм ҡырҡкөйлә-мең ырыуына хас булған был эштең уртаһында ҡайнай. Башҡорт аҫалы балаҫын һуғыу традицияһын тергеҙеүселәрҙең береһе Рабиға апай Йәрмиева Ғафури районы Сәйетбаба ауылында йәшәй. Сәйетбабалағы Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгендә ойошторолған балаҫ һуғыу түңәрәгенә лә күп өмөттәр бағлана, әммә ләкин ысын оҫталар бик һирәк була икән шул. Кесетабын ырыуы көн иткән был ауылда элек-электән бик яҡшы балаҫсылар булған, сепрәктән, йөндән балаҫтар - турпыша менән көйөҙ һуғып донъя көткән был быуындың бер-ике ярсығы ғына ҡалған. Шундай аҫыл оҫталыҡ ярсығы - Миннеямал апай Рәхимованың ҡыҙы Минира Харрасовала. Әсәһенән ҡалған иҫке ағас станокта - балаҫ һуғыу урынында ифрат сифатлы яңы көйөҙҙәр һуға Минира. Йөн ептәр һатыуҙыҡы булһа ла, эшләнеше боронғоса таҫыллы һәм ныҡлы булғас, Минираның эштәре күҙгә бәрелә, ҡулға эләгеп, күңелгә ятып тора. Оҫталыҡты һатып алмайҙар, отоп алалар икән шул. Бала саҡтан әсәһе менән бергә өйрәнгән эште ҡул бармаҡтары ла, күңел зауҡы ла элекке кимәлдә тота ала.

* * *

Нәҫеле менән балаҫсы тигән дан алғандар һәр ауылда осрай. Миәкәләге Илсеғол ауылында йәшәгән Шәһәрбаныу апай Арыҫланова "Мин балаҫ ҫукмай бер көн тора алмайым. Әлшәй яғында Ҡармышта йәшәгән сеңелем Гөлсөмбаныу минән дә артыра, ул аҫаламайынса тороуға бер сәғәт тә түҙмәй..." Ысынлап та, улар икеһе лә апалы-һеңлеле оҫта булып, Дим буйы халҡын аҫаларға байытҡан легендар шәхестәр. Беҙ 2016 йылда Миәкә районы Күл-Ҡаран ауылында йәшәгән Зөбәржәт апайҙың, Елдәр ауылынан Гүзәл Вәлитованың һуҡҡан аҫалы балаҫтарын күреп, хайран булдыҡ. Беҙ, тигәнем, Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһы мөдире Кәримә Шәрип ҡыҙы Ҡайҙалова менән "Ағиҙел" художество берекмәһе директоры Зөһрә Салауат ҡыҙы Исмәғилева һәм мин башҡорт аҫаларының ҡайҙа, нисек һәм кемдә һаҡланыуын ҡарап йөрөп ҡайтҡайныҡ.

Бөтә республикаға танылған оҫталар бар - Әлшәй районынан Фатима Нурислам ҡыҙы Шәғәйепова, Минзилә Зәфәр ҡыҙы Муллағолова, Нәсимә Ғәлиәхмәт ҡыҙы Зәйҙуллина, Гөлсөмбаныу Хажиәхмәт ҡыҙы Ғәбдрәхимова, Миңлегөлсөм Ниғмәтулла ҡыҙы Ғәлиуллина, Рәйсә Ғарифулла ҡыҙы Рафиҡова, Тәслимә Ғата ҡыҙы Кәлимуллина, Вәрисә Маннан ҡыҙы Имаева, Зәһрә Ар-



✓ ***Шуға күрә аҫалы балаҫтағы боронғо башҡорт геометрик орнаменттарына өҫтөнлөк бирелә. Башҡорт аҫалы балаҫының халыҡсанлығы, эпик мәғәнәһе, зауыҡлы төҫтәрҙә балҡышы бик юғары баһалана.***





ғынбай ҡыҙы Әхмәтовалар, Миәкәнән Рәйлә Шәймәрҙән ҡыҙы Зәйнуллина, Бишбүләктән Сәғәҙәт Мәжит ҡыҙы Фәсхиева һәм башҡалар.

* * *

Балаҫты һуғырҙан алда йөндө тетеү, иләү, сиратыу, буяу, йомғаҡлау эше тора. Уны өмә менән башҡарыу яйһыҙ. Йөн эптең йыуанлығы, сираҡлығы балаҫтың сифатында сағыла. Шуға күрә иләү-сиратыу бер ҡулдан, йәғни бер генә кеше тарафынан эшләнһә, балаҫ тигеҙ була. Буласаҡ балаҫ һәр ваҡыт кемгәлер бағышлап һуғыла. Һатыр өсөн әҙерләнгән балаҫ та Аллаға тапшырылып, изге теләк, матур хистәр менән һуғыла. Аҫаны - орнаментты һайлау



ҙа бик мөһим һанала. Ҡыҙ балаға йәки ир балаға тәғәйен аҫалар була. Ҡайһы бер оҫта ҡулы-күҙе өйрәнгән айырым бер аҫаны ғына үҙ итә. Ләкин ысын оҫталар боронғо аҫаны ғына күсерә, үҙгәртеүҙән-боҙоуҙан тыйыла. Һәр аҫаның көсө, ырымы, мәғәнәһе булыуға улар ышана. Һуңғы осорҙа балаҫҡа сағыу роза сәскәләре һүрәтен ҡуйыуҙы балаҫ оҫталары һәм ғалимдар хупламай. Самаһыҙ сыбарлыҡ, артыҡ сағыу төҫтәр балаҫтың тылсымлы матурлығын кәметә. Шуға күрә аҫалы балаҫтағы боронғо башҡорт геометрик орнаменттарына өҫтөнлөк бирелә. Башҡорт аҫалы балаҫының халыҡсанлығы, эпик мәғәнәһе, зауыҡлы төҫтәрҙә балҡышы бик юғары баһалана.

Башҡорт аҫаларының исем-атамалары бар - "Йондоҙ", "Баҙыян", "Айсыҡ", "Ете алма", "Батмус", "Еләк сәскәһе", "Самауыр тояғы", "Әҙрәс", "Көнбағыш сәскәһе", "Сулпы", "Ҡаҙ тәпәйе", "Бетеү"...

Балаҫ һуғыу станогы "урын", "урындыҡ" тип йөрөтөлә. Йөн епте урынлаштырыу - "оҙатыу" тип атала, уны яңғыҙ эшләмәйҙәр. Ике кеше оҙата. Аҫа һалыу өсөн әҙерләнгән буяулы йөнептәрҙе ваҡ суҡ-йомғаҡ итеп урамалап, "сыйырсыҡ" яһап ҡуялар, уларҙы арҡыры урҙаға теҙеп эләләр. "Яратып һуҡҡан - нағыш, теләмәй һуҡҡан - ялғыш", тигән әйтемдә балаҫ һуғыусының эше мөхәббәт һәм тырышлыҡ емеше икәне сағыла.

Балаҫ аҫалау төрлө ырым-йолалар, һынамыштар, мәҡәл-әйтемдәр, йыр-һамаҡлау менән тулы фольклор күренеше лә булып китә. Балаҫ урыны артында ултырған әсә балаларын тәрбиәләү өсөн дә ваҡыт табырға тейеш. Йөндө иләү, епте сиратыу, буяу, сыйырсыҡ яһау - хеҙмәт тәрбиәһе биргән эштәр. Аҫаны боҙмау, ентекләп һанап һуғыу ҙа ҡатын-ҡыҙҙан иғтибарлылыҡ талап итә, бындай диҡҡәтлелек балаларға ла үрнәк була.

Балаҫ аҫаларға башлағанда өйгә килеп ингән кешегә әйтелә торған һүҙҙәр була. "Аяғың еңел булһын, балаҫ аҫалай башланым!" йәки "Урамда кем осраны, аяҡ-ҡулы еңелме?" тип һорашалар. Был һорауға, һис шикһеҙ, ыңғай яуап булырға тейеш: "Еңел, бик тә еңел, балаҫыңды ла еңел эш итерһең!"

Балаҫты һуғып бөтөрөп, урындан ысҡындырып ҡырҡып алырҙан элек тәҙрә ҡорғандарын ҡоралар, ишекте келә һалып бикләйҙәр, балаҫты киҫеп алғанда берәйһе килеп кермәһен, уның ғүмере киҫелеп ҡуймаһын, тигән теләк менән тиҙ генә киҫеп алалар. "Балаҫ киҫмәйем, фәлән ҡарт менән фәлән ҡортҡаның ғүмерен киҫәм", тип ныҡ ҡартайған кешеләрҙең исемен әйтеп ҡуялар. Был ырымда йөн балаҫҡа күпме кеше хис-тойғолары күсеүе, балаҫтың тере әйберҙеке һымаҡ энергетикаһы булыуға ышаныу, уның ижад емеше булып тыуған мәленә кендек киҫеү кеүек ҙур әһәмиәт биреү сағыла.

* * *

Балаҫ һуғыусыларҙы кем шулай илгә күрһәтә һуң? Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһы аҫалы балаҫтарға арналған күргәҙмәләр ойоштора башлай. Тәүге республика фестивале 1998 йылда Күмертау ҡалаһында үтте, тип хәтерләй галерея етәксеһе Кәримә Шәрип ҡыҙы Кайдалова. "Башҡортостан - йондоҙ аҫалар иле" тигән телефильмдар республика күргәҙмәләрендә танылыу алған аҫалы балаҫ ояларының - Миәкә, Бишбүләк, Әлшәй, Дәүләкән, Ғафури яҡтарының - оҫталары менән таныштырҙы. Уҙған егерменсе быуаттың һикһәненсе йылдарында Бөрйән районының Иҫке Монасип, Байназар ауылдарында уҡытыусы Марат Ғизетдин улы Муллағолов мәктәптә балаҫ һуғыу урындарын ҡороп ултыртҡайны. 1993 йылдағы республика башҡорт теле уҡытыусыларының семинарында беҙ уларҙы телевидение тапшырыуына ла төшөрөп алдыҡ. Тимәк, киләсәктә төбәктә туризм йәнләнерен, халыҡтың үҙ кәсептәрен тергеҙеү юлы менән генә булмышын-көнкүрешен һаҡлап ҡалырын күҙаллаған һәм ҡайғыртҡан ил ағалары булған һәм бар, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалыу ғына шарт.

Архангел районы Орловка ауылы мәҙәниәт йорто етәксеһе Фәнисә Фәрит ҡыҙы Сәйфетдинова ла, үҙе килен булып төшкән был урыҫ ауылында йорт сарҙаҡтарында, келәттәрҙә һаҡланған станоктарҙы йыйып, клуб эсендә унлап станок ҡороп ҡуйҙы. Орловка йәштәре өлкән йәштәге оҫталарҙан таҫтамал, балаҫ һуғыу ысулдарын өйрәнеп алды. Бөгөн Фәнисә Сәйфетдинова республикала һәм Рәсәйҙә үткән халыҡ-ара һөнәрмәндәр фестивалдәрендә даими ҡатнаша, Орловканың ағас оҫталары яңы туҡыу һәм һуғыу урындары яһай, уларҙы хатта Өфөгә мәктәптәргә, балалар йорттарына һатып алалар һәм балаҫ һуғыусылар һаны арта. Өфөләге 6-сы балалар йортондағы оҫталыҡ түңәрәге лә Фәнисәнең дәрестәренән һуң дәртләнеп эшләп китте, улар аҫалап һуғып биҙәгән сумкалар, рюкзактар, урынер ҡаралтыһы, йәғни замандса ҡулланыу әйберҙәре республика күргәҙмәһенә ҡуйылды.

* * *

Һуңғы йылдарҙа Әлшәй районы етәкселеге, ниһайәт, аҫалы балаҫтар һуғыу хәрәкәтен үҙ ҡулына алды, республика башлығы гранты менән оҫталарҙың йыйынын да, күргәҙмәһен дә ойоштороҙо. Һәр йыл һайын марттың тәүге йәкшәмбеһендә беҙҙә "Аҫалы балаҫ йәрминкәһе" уҙғарыласаҡ, тип иғлан итте әлшәйҙәр. Төбәктәге оҫталарҙың ижадына ихтирам йөҙөнән бурыс ителгән был сараның маҡсаты - ауыл халҡының матди хәлен яҡшыртыу, борондан уңғанлыҡ-гүзәллек емеше булған аҫыл һөнәрҙең рухи байлыҡ, милләт хазинаһы икәнен күрһәтеү, балаҫ аҫалауҙың серҙәрен өйрәнеү һәм йәш быуынға тапшырыу.



Бөгөн аҫалы балаҫ төбәге булған Әлшәй районы етәкселәре башҡорт аҫалы балаҫтарын заманса талаптарға ярашлы сифат менән етештереү, халыҡ традицияларына нигеҙләнеү, республиканың мәҙәни һәм иҡтисади тормошон нығытыу идеяһын яҡлап сыҡты. Аҫалы балаҫ - үткән заман, тип ҡараусылар бар. Ә беҙ, киреһенсә, уның киләсәктә лә башҡорт өйөнөң, мәҙәниәте, халыҡ сәнғәтенең үҙәгендә буласағына ышанабыҙ, ти улар. Әммә ике йылға бер оҫталарҙы йыйыу менән генә эш бөтмәй ҙә, алға ла бармай икән. Тотош бер программа менән эҙмә-эҙлекле барлау-һайлау-өйрәтеү алып барғанда ғына аҫалы балаҫ һуғыусыларҙың яңы сифатлы эштәрен күрергә мөмкин.

**Әйткәндәй, "Башҡортостан" ТРК-һы фондында Башҡорт аҫалы балаҫтарына арналған телефильмдар һаҡлана. Уларҙы Ютуб каналында ҡарарға мөмкин.**

**Сәрүәр СУРИНА.**
**(Аҙағы. Башы 34-се һанда).**

(Аҙағы. Башы 34-се һанда).



СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Шуға күрә иң мөһиме - мейене бер туҡтауһыҙ эшләргә мәжбүр итергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башты эшләткәндә, ҡартайғансы нервы күҙәнәктәренең үлеүен әүҙемдәренең эш сифатын яҡшыртып ҡапларға мөмкин. Ҡартлыҡтың йәшлек кеүек үк емешле булыуы миҫалдары ла быны раҫлай: Софокл 100-сө йәшендә гениаль әҫәр булған "Эдип" трагедияһын ижад итә. Лев Толстой, Вольтер, Гете, Бернард Шоу 80 йәште уҙғас әҙәби шедеврҙар тыуҙыра. Илья Репин, Иван Айвазовский 80-85 йәштәрендә иң яҡшы картиналарын яҙа. Артур Рубинштейн 89 йәшендә концерттар ҡуя. Микеланджело һәм Тициан 90 йәште үткәндән һуң да емешле ижад итә. Бөйөк ғалимдар - Павлов, Крылов, Зелинский, Гамалея, Мичурин 80 йәштән һуң да тәжрибәләр үткәрә һәм лекциялар уҡый.

Әлбиттә, күптәр олоғая килә хатта компьютерҙы өйрәнергә лә ауырһына. Йәш артҡан һайын физик, ҡайһы бер интеллектуаль һәләттәр насарая, хәтер юғала. Күптәр үҙгәрештәр артынан ҡыуып етә алмауына зарлана, тормоштан ситләшеү теләге тыуа. Был дөрөҫ түгел. Киреһенсә, яңылыҡ баҫымынан ҡурҡырға түгел, уны аңларға тырышырға кәрәк. Сөнки интеллектуаль көсөргәнеш баш мейеһен нығытып ҡына ҡалмай, ә үҙ-үҙеңә ышаныс тыуҙыра. Алтмышты артылған кеше өсөн оҙаҡ йәшәүҙең бер рецебы бар: эшләгеҙ. Был йәштә лә, исмаһам, ҙур булмаған уңыштарға өлгәшегеҙ. Ялҡаулыҡ - тормоштан китеүҙең иң тиҙ юлы. Шуға ла ялҡаулыҡты үлемгә тиң гонаһ тип һанауҙары юҡҡа түгел.

"Үлемесле гонаһ" билдәләмәһен изге яҙмалар индерә. Әммә дини тышлыҡты алып ташлаһаң, был гонаһ - әхлаҡи һәм физик мәғәнәлә сәләмәт тормош рәүешен тупаҫ боҙоу ул. Йәғни "үлемесле гонаһ" - кешенең сәләмәтлеген һәм ғүмерен тартып алған ғәмәл. Ялҡаулыҡ һәм артығын ашау - кеше ғүмерен ҡыҫҡартыусы ике хәүеф. Асыу, көнсөллөк, күңелһеҙләнеү, түҙемһеҙлек - кешене емереүсе икенсе "үлемесле гонаһ"тар.

Ә баш мейеһе - беҙҙең иң ялҡау ағза, шуға ла аҡыл ялҡаулығын еңеү иң ауыры. Баш мейеһе бик йыш эштән түгел, ә эшһеҙлектән зыян күрә. Әүҙем эшмәкәрлектән ул таушалмай, киреһенсә, нығына һәм үҫешә. Мускулдар кеүек үк, эшһеҙлектән мейе бөлтерәй. Был теләһә ҡайһы йәш өсөн мөһим. Әммә хәтер яҡшы һаҡланһын һәм аҡыл айыҡ булһын өсөн ҡартлыҡта мейе әүҙем эшләргә тейеш. Мөмкинлек булғанда, һөнәрегеҙ буйынса эшләүҙән туҡтамағыҙ, йәш коллегаларығыҙға ярҙам итегеҙ, мәҡәләләр, китаптар яҙығыҙ. Сит телдәр өйрәнегеҙ, башватҡыстар сисегеҙ, шиғырҙар ятлағыҙ. Былар мейенең ҡартайыуына ҡаршы тора.

Рәсәй Фәндәр академияһының Геронтология йәмғиәте президенты Владимир Анисимов та был фекер менән килешә:

- Нобель лауреаттарының ғүмер оҙайлығы тураһындағы мәғлүмәттәр анализы уларҙың ябай кешеләргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәүен күрһәтә. Рәсәй Фәндәр академияһы ағзаларының тормошо ла өйрәнелә. Баҡтиһәң, академиктар ҙа оҙаҡ йәшәй икән. Белем ни тиклем юғарыраҡ, ғүмер шул тиклем оҙайлыраҡ икәнлеге лә яҡшы билдәле.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.*

*(Бальтасар Грасиан).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 27 АВГУСТ - РӘСӘЙ КИНОҺЫ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**33-сө һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Кваша. Мәжитов. Платонов. Сабата. Икеле. Алек. Әлифба. Олуғ. Мичуринск. Бәке. Азат. Елкә. Ойошма. Шәкел. Котов. Әлтә. Яҡут. Әлфиә. Әҙәп. Арка.
**Вертикаль буйынса:** Исемдәш. Пшеничнюк. Егермелә. Март. Ләйсән. Оран. Выждан. Әкәлә. Ока. Лупа. Вәкил. Торф. Анонс. Иләк. Сөнәгәтов. Броня. Альф. Авиадесант.

БАҠСА



# ЕЛӘГЕ ЛӘ ЕЛӘГЕ!

**Баҡса eләгe ултыртылғандың өсөнсө йылына иң юғары уңыш бирә. Ошонан һуң eләктәр йылдан-йыл аҙыраҡ, вағыраҡ була бара, тупраҡ та ярлылана. 4-5 йыл һайын eләк түтәлдәрен яңы урынға күсереү дөрөҫ һанала.**

Әгәр ҙә баҡса ерегеҙ тар һәм eләкте башҡа урынға күсереп ултыртыу мөмкин түгел икән, eләк үҫентеләрен йәшәртергә була. Бының өсөн яңы үҫенте һатып алыу ҙа кәрәкмәй. Eләк түтәлен яҡшылап ҡарап сығығыҙ. Иң көслө, мул уңыш биргән йәки тәме буйынса үҙегеҙгә ныҒыраҡ оҡшаған төптәрҙе билдәләп ҡуйығыҙ. Әгәр ҙә төймәләнгән eләктәрен дә өҙөп ташлаһағыҙ, үҫемлек бар көсөн мыйыҡ ебәреүгә һаласаҡ, ә һеҙ күсереп ултырытыу өсөн бынамын тигән материал аласаҡһығыҙ. Яңы төптәрҙе күсереп ултыртҡанда тупрағы менән ҡаҙып алығыҙ, был осраҡта eләк тамыры артыҡ зыян күрмәй һәм ул икенсе йылына уҡ яҡшы уңыш бирәсәк. Кәрәкмәгән мыйыҡтарҙы ҡырҡып ташлағыҙ, юғиһә плантация ҡуйырасаҡ, eләктәр вағаясаҡ.

Eләк ултыртыу өсөн тигеҙ урын һайлағыҙ. Рәттәр араһында 60-70 см, ә үҫентеләр араһында 15-20 см ара ҡалһын. Тупраҡ өҫтөнә торф, янған тиҙәк, ҡара полиэтилен пленка, һалам түшәһәгеҙ, үҫемлектәр яҡшы ҡышлаясаҡ, яҙын дымды күп юғалтмаясаҡ.

Eләкте башлап ҡына ултыртһағыҙ, бер нисә сортты һайлағыҙ. Уларҙың ҡайһылары һеҙҙең ерегеҙҙә яҡшыраҡ үҫеүен төшөнөү өсөн кәрәк был. Һуңынан үҙегеҙгә оҡшаған 3-4 сортты ҡалдырырһығыҙ. Eләк ултыртыуҙы кисен башҡарығыҙ, ямғыр яуып торған мәл булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Баҡсала бер юлы ябай баҡса eләгe лә, ремонтант сорт та булһын. Тәүгеһе уңышты июнь-июлдә бирә. Икенсеһе йылына ике тапҡыр уңыш бирә. Ултыртҡандан һуң eләккә туйындырғансы һыу һибегеҙ.

Туҡландырыуға килгәндә, ғәҙәттә, eләккә ашлама индермәйҙәр. Алдан eләк ултыртыласаҡ тупраҡҡа серегән тиҙәк һалыу һәйбәтерәк буласаҡ.

Әйткәндәй, буш ерҙәргә үлән урынына eләк ултыртырға була. Уға артыҡ тәрбиә кәрәкмәй, бары тик иҫкергән төптәрҙе алып ташларға ғына кәрәк. Ҡояшлы ерҙә ваҡ булһа ла, eләгe лә була. Йәғни, йәшеллек тә ҡыуандырыр, йәй буйы eләк тә ашарһығыҙ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (23) дүшәмбе | 4:58 | 6:28 | 13:30 | 18:32 | 20:02 | 21:32 |
| 4 (24) шишәмбе | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:29 | 19:59 | 21:29 |
| 5 (25) шаршамбы | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 18:27 | 19:57 | 21:27 |
| 6 (26) кесе йома | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 18:24 | 19:54 | 21:24 |
| 7 (27) йома | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:22 | 19:52 | 21:22 |
| 8 (28) шәмбе | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 18:19 | 19:49 | 21:19 |
| 9 (29) йәкшәмбе | 5:09 | 6:39 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 сентябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+
**6 сентябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 сентябрь** Ирандың ике билдәле коллективы - **"Хамна-вазане Тадж"** милли музыка ансамбле менән **"Сахра"** Ирандың традицион бейеүҙәре ансамбле сығыш яһай. Концерт Рәсәйҙә Иран мәҙәниәте аҙнаһы сиктәрендә үтә. Башлана 19.00

## Әкиәт иле саҡыра!

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры яңы миҙгелгә әҙерлек башланы. Тамашасыларҙы **"Етем төлкө"**, **"Буратино"**, **"Ҡыҙыл башлыҡ"** спектаклдәренең, **"Мостай Кәрим. Яҡын офоҡ"** спектакль-портреты премьералары көтә.

"Етем төлкө" - туған телдәрҙе өйрәнеү һәм һаҡлау буйынса программа сиктәрендә эшләнгән. Ошондай исемле башҡорт халыҡ әкиәте барыбыҙға ла яҡшы таныш. Хәҙер уны ҡурсаҡтар уйнауында ҡарай аласаҡһығыҙ. "Ҡыҙыл башлыҡ" әкиәтен дә күптәр яраталыр. Әлеге мәлдә был спектаклгә ҡурсаҡтар һәм декорациялар әҙерләнә. Унда Рәсәйҙең халыҡ артисы Айрат Әхмәтшин да уйнаясаҡ. Бөйөк шағирҙың тормошо һәм ижады тураһында "Мостай Кәрим. Яҡын офоҡ" спектакле өлкәнерәк тамашасыларға тәғәйенләнә. Ул "Балаларға театр" программаһы сиктәрендә ҡуйыла. Спектаклде әҙерләүҙә рәссамдар Илнур Сләүшин менән Әнисә Томаншина, композитор Урал Иҙелбаев эшләй. Унда хореография номерҙары ла, видео-проекция ла бар, актерҙар былай ҙа, битлектә лә уйнаясаҡ, шулай уҡ төрлө ҡурсаҡтар ҡулланыласаҡ. Премьера 12 октябргә тәғәйенләнгән.

**15 сентябрҙә 87-се ижад миҙгелен асыу тантанаһы була.** Был көндө бәләкәс тамашасылар А. Толстой әҫәре буйынса "Буратино" спектаклен ҡараясаҡ. Спектаклде саҡырылған режиссерҙар Петр Васильев (Петрозаводск) менән Алевтина Торик (Санкт-Петербург) сәхнәләштерә.

✔ *Дөрөҫлөк үҙе генә еңеү яулай алмаған, ярҙамға ялғанды саҡырған.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.



# ҠАҘАҠТАРҘА ҠУНАҠТА

**Үткән аҙнала Астананың 20 йыллығы айҡанлы Ҡаҙағстан Республикаһының үҙәк паркында "Аҡбуҙат" Башҡорт этномәҙәни берекмәһе" ойошмаһы инициативаһы менән Йыйын үтте.**

Был сараға Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре бай күргәҙмә материал алып барҙы. Сараны тантаналы асҡанда хакимиәттең телдәр сәйәсәте буйынса бүлек хеҙмәткәре Рәсим Сотангәрәев ҡотлау адресын уҡып тәбрикләне. Байрам дауамында теләүселәр милли ярыштарҙа, уйындарҙа ҡатнаша, матбуғат баҫмалары, милли кейем һәм биҙәүестәр күргәҙмәһе менән таныша алды. Башҡорт милли костюмы һәм биҙәүестәре менән ҡунаҡтарҙы Өфө дизайнеры Илдар Ғатауллин таныштырҙы. Шулай уҡ башҡорт милли кейемдәре менән ҡыҙыҡһыныусы ҡаҙаҡ рәссамы Радина Батпенованың башҡорт этно-модаһын демонстрациялауы ла һоҡланыу уятты. Тамашасылар Сибай концерт-театр берләшмәһе артистары әҙерләгән сағыу программаны көслө алҡыштарға күмде. Әйткәндәй, Өфө ҡалаһы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре араһында ҡала һәм республика кимәлендә уҙғарылған үҙешмәкәрлек конкурстарында даими еңеү яулай. Шуға ла Рәсим Солтангәрәевтың "Еҙ үксә" бейеүе, Ғаяз Бикбулатовтың ҡурай моңдары тамашасы күңеленә хуш килеүе юҡҡа түгел.

- Астана халҡы үҙе өсөн яңылыҡ асты. Был тойғонон баһаһы бик ҡиммәт. Беҙ үҙенең тамырҙарына ихтирам менән ҡарағандарҙы баһалайбыҙ, уларға ярҙам итәбеҙ. Башҡорт милли костюмдары һоҡландырҙы. Беҙҙә йәшәгән башҡорттарға тарихи ватанындағы милләттәштәренән ярҙам күрһәтелеүе шатлыҡлы, - тип билдәләне Ҡаҙағстан халыҡтары ассамблеяһы секретариаты мөдире Ләззәт Кусаинова.

# ҠУРАЙЫБЫҘ ЕҢЕҮЕ

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азат Биксурин Мәскәүҙә "Алтын көҙ-2018" ҡаҙаҡ мәҙәниәте фестивале сиктәрендә үткәрелгән инструменталь музыка конкурсында беренсе премия лауреаты булды.**



Проект Рәсәй Федерацияһы Президентының граждан-лыҡ йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән гранты булышлығында уҙа. 2012 йылдан алып фестивалдә "Мурагер" Мәскәү ҡаҙаҡ мәҙәниәте йәмғиәте" төбәк йәмәғәт ойошмаһы үткәрә. Алты йыл эсендә фестиваль Рәсәй төбәктәрендә генә түгел, сит илдәрҙә лә йәштәр, мәғариф һәм мәҙәниәт учреждениелары, диаспора вәкилдәре, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар, эксперттар, ғалимдар, уҡытыусылар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, этнографтар, фольклор коллективтары етәкселәре, халыҡ кәсептәре һәм һөнәрҙәре оҫталары, милли ижади һәм мәҙәни берекмәләр вәкилдәре араһында популярлыҡ яулап өлгөрҙө.

# ҮҘҘӘРЕН ДӘ ТАНЫТАЛАР...

**Мәскәүҙең "Заман" башҡорт этно-төркөмө быйыл йәй Нидерландтарҙа төшөрөлгән клип сығарҙы. "Алға" йырын композитор Айҙар Хәмзин Фатима Янбаева һүҙҙәренә ижад иткән.**

"Алға" - ғәмәлдәр ҡылыуға саҡырыу ул. Йәш, йөрәктә ялҡын бар саҡта маҡсаттарыңа һәм хыялдарыңа иреш - йырҙың мәғәнәһе шул, - ти музыканттар. - Клипты Ватт дингеҙе буйында, Харлинген һәм Леуварден ҡалаларында ике көн эсендә төшөрҙөк. Клипта голландтарҙың йәшәү рәүеше сағыла - тәбиғи, гримһыҙ, макияжһыҙ һәм прическаһыҙ. Барыһы ла бик ябай. Унда нисек йәшәнек, кадрҙа ла шундайбыҙ". Видео өҫтөндә режиссер Тимур Сафиуллин һәм Ural Stars командаһы эшләгән. "Бер нисә сәфәрҙән һуң клиптар идеяһы тыуҙы. Үҙебеҙ менән оператор алырға кәрәк икәнлеген аңланыҡ, сөнки беҙ - сит илдәрҙә башҡорт мәҙәниәтен популярлаштырыусы төркөм. Төрлө илдәрҙә башҡорт телендә клиптар төшөрөү символик мәғәнәгә эйә", - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына төркөм етәксеһе Радмир Мөфтәхин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Нидерландтарҙа Мәскәүҙең "Заман" төркөмө "Liet International" халыҡ-ара конкурсының финалында ҡатнашты һәм иң яҡшы 5 коллектив иҫәбенә инде.

# БАШҠОРТ КИТАБЫ - РУССА

**Мәскәүҙәге "Нәфис әҙәбиәт" нәшриәтендә башҡорт яҙыусыһы Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы донъя күрҙе.**

Өс романдан торған китап авторҙың үҙенең тәржемәһендә баҫылып сыҡҡан. Баҫманың тиражы - 1000 дана. Китапты Рәсәй китапханаларында һәм китап магазиндары кәштәләрендә күрергә мөмкин. "Башҡорт авторҙарының әҫәрҙәре Мәскәүҙә 30 йылға яҡын баҫылғаны юҡ. Ошо тенденцияны еңергә, Рәсәй кимәлендә сығырға кәрәклеге хаҡында күптән һөйләйем. Тәүге романымдың ҡулъяҙмаһын нәшриәт мөхәррире Алексей Гришановҡа ебәрҙем, ул китапты юғары баһаланы һәм баҫтырырға тигән ҡарар ҡабул итте. Икенсе һәм өсөнсө романдарҙы рус телендә сығарыуға ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әҙерләргә тура килде", - тине Флүр Ғәлимов "Башинформ" агентлығына.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҒӘЙЙӘР ИР...

## ҡуҡҡа бөркөт сөйә

♦ Китапһыҙ өй - тәҙрәһеҙ ер аҫты мунсаһы.
♦ Үҙ илең - гөлстан, сит ил гүрстан.
♦ Милләт теле һәр милләтең үҙенең ҡулында.
♦ Туған телең - аҡыл баҫҡысы, аралашыу асҡысы.
♦ Ҡайғы көтмәгәндә килә, ярамһаҡ артындан көлә.
♦ Ямманды ҡарғама - ҡарғыш үҙеңдә ашар.
♦ Елдергәндә ел, йәлләгәнды яу баҫыр.
♦ Маһайған өҫкә танауын сөйһә, ғәййәр ир ҡуҡҡа бөркөттө сөйә.
♦ Маҡтанғанды мүк баҫҡанда, тыйнаҡтар күккә оса.
♦ Итәк-еңең йыйнап йөрө - ил буйынса ҡара даның китмәһен.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САҠЫРЫЛМАҒАН ҠУНАҠ...

## юнмаған таяҡ

Дөрөҫлөк үҙе генә еңеү яулай алмаған, ярҙамға ялғанды саҡырған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп дарыуҙарҙың файҙаһыҙ икәнен аңлаған врач ҡына ысын врач.

**(Бенджамин Франклин).**

Хаталарҙан азат кеше тормошта бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәк.

**(Иоганн Гете).**

Алданыуҙан ҡурҡып йәшәгәндәр бер ваҡытта ла хәҡиҡәткә юлды таба алмаҫ.

**(Е. Кайоран).**

Үҙ һүҙеңдә тороуҙың иң яҡшы ысулы... ул һүҙҙе бөтөнләй бирмәү.

**(Наполеон Бонапарт).**

Донъяны үҙгәртеп була... кешенең үҙен үҙгәртеп кенә.

**(Фарсы мәҡәле).**

Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.

**(Бальтасар Грасиан).**

Күптәр тормошта үҙ эсенә бикләнеп, бары тик үҙ үҙе менән генә була һәм... бик тиҙ яуызға әйләнә.

**(Фридрих Ницше).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер ауылда бер туған ике ағай-эне йәшәгән. Бер-береһенә ни тиклем генә оҡшаш булмаһындар, уларҙы айырып торған нәмәләр ҙә булған. Мәҫәлән, кесеһенең тормошта барыһы ла көйлө барған, икенсеһен, өлкәнен, гел генә уңышһыҙлыҡтар һағалап торған.**

**Бер саҡ эне кеше ағаһына килә һәм уның бар эшләгәне уңышһыҙ килеп сыҡҡанын аңлап, шундай һорау бирә:**

**- Ағай, һин үҙеңдең тормошоңдо үҙгәртеү, эштәреңдә көйләү өсөн ниҙәр ҡылаһың?**

**- Көн-төн эшләйем дә эшләйем...- тип яуаплай ағай кеше.**

**- Ә хеҙмәтең һиңә шатлыҡ килтерәме һуң?**

**- Юҡ, шатлыҡ килтермәй һәм һәр эште башҡарыу ауырға тура килә, - ти ағай кеше баш түбән эйеп.**

**- Ә һин үҙ эшеңдән шатлыҡ эҙлә, - ти энеһе.**

**- Хәтереңдәме, бала саҡта һин балсыҡтан төрлө һындар яһарға ярата инең? Шунан башла ла: ихатанды балсыҡ һындар менән биҙә...**

**Бер йылдан ағай менән эне тағы осрашалар. Энеһе ағаһынан:**

**- Хеҙмәтеңдә шатлыҡ табырға өйрәндеңме, ағай?**

**- Эйе, шатлыҡ бар ҙа ул, әммә барыбер уңышһыҙлыҡ һағалап тик тора... - тип яуаплай ағаһы.**

**- Эш эшләгәндә нимә тураһында уйлайһың һуң?**

**- Ана шул миңә һөжүм итәсәк уңышһыҙлыҡтар тураһында инде... - ти ағай кеше... "**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
31 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1534/08